ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

5-11 декабрь (аҡъюлай) 2025

№48 (1192)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Мөнәсәбәттәр...**

асыҡ һәм ихлас булһын



3

**Бөрйәндәр осрашты...**

бөрйәндәр менән



6

**Рәссам хеҙмәте...**

быуындарҙы быуындарға тоташтырыусы ул



8-9

**Башҡорттарҙан геродотлыҡ анҡый...**



10-11

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Арзанға яҙылып ҡалығыҙ! Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, 3 декабрҙән 13-нә тиклемге ун көнлөктә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 2026 йылдың беренсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән 905 һум 04 тингә яҙыла алаһығыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ икәнен дә онотмағыҙ.***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Ир-егет ниндәй сифаттарға эйә булырға тейеш тип уйлайһығыҙ? Ул сифаттар һеҙҙең үҙегеҙҙә бармы? Уларҙы нисек тәрбиәләргә?

***Алмас ШАММАСОВ, шәхси эшҡыуар, шағир, журналист:*** Ир кеше ғаиләһенең, яҡындарының, иленең терәге булырға тейеш, тип уйлайым. Ә бының өсөн иң төп сифат - көслө булыу. Физик яҡтан ғына түгел. Рухи яҡтан - иң тәү сиратта. Мыжыҡ булмаҫҡа. Йығылып ҡалғанда ла, һикереп торорға үҙендә көс таба белергә. Һаҙлыҡҡа батҡанда ла, унан сығыу юлдарын эҙләргә. Бирешмәҫкә. Ныҡышмал булырға. Сәмләнеп эшләргә.

Ысын ир кеше - ул ғүмер буйына көрәшсе. Яу яланында иленең азатлығы өсөн үҙен аямай алға ынтылғанда ла, хеҙмәттә юғары кимәлгә өлгәшергә теләгәндә лә. Хатта мөхәббәте өсөн көрәшкәндә лә.

Миндә ул сифаттарҙың күбеһе юҡ, ҡыҙғаныс҇ҡа ҡаршы. Мин әлегә ғаиләмә лә, иләмә лә, үҙемә лә һаман да, ҡырҡ йәшкә етеп барғанда ла, ныҡлы терәк була алмағанмын һымаҡ. Әммә ысынбарлыҡҡа асыҡ итеп ҡарай белеү ҙә үҙенә күрә ҙур аҙым, тип уйлайым. Һәм ысын ир кеше дәрәжәһенә етергә тырышыуҙың бер ғилләһе һымаҡ та ҡабул итәм.

Атайым был йәһәттән миңә ҡарағанда күпкә көслөрәк, ихтыярлыраҡ шәхес ине. Ул үҙенә, үҙенең талантына, маҡсаттарына, хыялдарына тоғро булып йәшәй белде. Бер ниндәй ауырлыҡтар алдында ла баҙап ҡалманы. Уларҙың быуыны, Бөйөк Ватан һуғышы йылдары быуыны - ысын баһадирҙар быуыны булған шул. Әлеге минең һымаҡ ир-егет әҫәрҙәре улар алдында сүп кенә.

Шул уҡ ваҡытта улымда атайымдың һыҙаттарын, холҡон күреп, ҡыуанам. Ундағы ғәҙеллеккә ынтылыш, көслө рух меңдәргә етерлек. Тимәк, улдарыбыҙ беҙгә ҡарағанда күпкә бейегерәк үрләйәсәк. Шуға ышанам.

## БЕР ҺҮРӘТКӘ ҠАРАП...



**Уҡыусыларыбыҙ хәтерләйҙер, ошондай рубрикала төрлө рәссамдарҙың рәсем-картиналары тураһында бергәләп фекер алыша торғайныҡ. Бына әле рубриканы яңыртып, иғтибарығыҙға Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы Сулпан Билалованың "Тауҙарҙы һаҡлаусы" картинаһын тәҡдим итәбеҙ. Ул һеҙҙә ниндәйерәк фекерҙәр тыуҙыра, ниндәй һығымталар яһата? Хат-хәбәрҙәр көтәбеҙ.**

**(Рәссам тураһында материалды 8-9-сы биттәрҙә уҡығыҙ).**

## "КИСКЕ ӨФӨ"НӨ УҠЫЙБЫҘ!



*"Киске Өфө"- халыҡсан рухлы гәзит. Милләтебеҙ яҙмышына битараф булмаған һәр кем уны мотлаҡ алдырып уҡырға бурыслы. Эйе, бурыслы тип әйтәм, сөнки уны күпселек ябай халыҡ, уҡытыусылар алдыра, ә бына һәр яҡшы башланғыстың лидерҙары булып, халыҡты изге ғәмәлдәргә әйҙәүсе, кәрәк саҡта милләттәштәре алдына сығып баҫып, ялҡынлы һүҙен әйтергә тейешле интеллигенция вәкилдәре был йәһәттән өлгө күрһәтә, тип әйтеүе ҡыйын, сөнки байтаҡ ҡына яҙыусыларҙың, артистарҙың, ойошма һәм учреждение етәкселәренең, хатта урындарҙағы хакимиәт башлыҡтарының да республикабыҙ баҫмалары менән бөтөнләй ҡыҙыҡһынмауын, матбуғат баҫмалары алдырып уҡымауын беләм.*

*Рамаҙан ҠОТЛОБАЕВ.*

## ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# УҪАЛ ЭТ - ХӘҮЕФЛЕ



**БР Дәүләт Йыйылышы депутаттары Дәүләт Думаһына уҫал эттәрҙе юғары хәүеф сығанағына индерергә тәҡдим иткән закон проектын индерҙе. Уның буйынса, Рәсәй Федерацияһы Граждандар кодексының икенсе өлөшөнөң 1079-сы статьяһына үҙгәрештәр тәҡдим ителә. Бынан алдараҡ Рәсәйҙең Закон сығарыусылар советында әлеге башланғысты хупланылар.**

Республика парламентының матбуғат хеҙмәтендә белдереүҙәренсә, документ юғары хәүеф сығанаҡтары исемлеген киңәйтә. Был, тәү сиратта, хайуандарҙың кешеләргә һөжүм итеүе тураһында эштәр буйынса граждандыҡ-хоҡуҡи бәхәстәрҙе хәл итеү өсөн мөһим. Хәҙер судтар быңдай хоҡуҡ боҙоуҙарға төрлөсә баһа бирә ала, шуға күрә матди һәм әхлаҡи зыянды ҡаплау тураһында суд ҡарарҙары ла төрлөсә булырға мөмкин. Әгәр закон ҡабул ителһә, төрлө ҡараштар булмай. Эт хужаһы юғары хәүеф сығанағы хужаһы булараҡ яуап бирергә тейеш. Зыян күреүсегә хайуандың һөжүм итеүен иҫбатлау ҙа етә. Тимәк, зыянды ҡаплау еңелерәк була. Был иһә эт хужаларын йорт хайуандарына, уларҙы өйрәтеүгә һәм йөрөтөүгә яуаплыраҡ ҡарарға мәжбүр итер тип көтөлә.

12+

*✓ Закон проекты фотоһүрәттәрҙә, киң мәғлүмәт сараларында, рекламала һәм йәмғәт киңлегендә православие тәреләрен, мосолман ярым айҙарын һәм башҡа дини символдарҙы "юйыу" практикаһын туҡтатыуға йүнәлтелгән.*



*ҠЫҪҠАСА*

# БАЛАЛАРҘЫ БҮЛӘКЛЕ ИТӘЙЕК!

**Ишле ғаиләләрҙәге балалар өсөн яңы йыл бүләктәре һатып алына, тип белдерҙе Башҡортостандың ғаилә, хеҙмәт һәм халыкты социаль яҡлау министры Ленара Иванова республика Хөкүмәтендә уҙған оператив кәңәшмәлә.** Һүҙ биш һәм унан күберәк бәлиғ булмаған балалы ғаиләләрҙә тәрбиәләнгән 14 йәшкә тиклемге балалар хаҡында бара. 2025 йылда 20 мең самаһы баланы татлы сюрпризлар көтә. Уларҙы 15 декабрҙән һуң "Ғаилә" үҙәктәре һәм социаль ярҙам учреждениелары белгестәре тапшыра. Тәрбиәгә алған һәм опекун ғаиләләрҙәге етемдәр өсөн дә бүләктәр бар. Бынан тыш, Донецк, Луганск, Херсон, Запорожье һәм Украинаның айырым территорияларынан, шулай уҡ Сүриә Ғәрәп Республикаһынан килгән һәм республиканың ваҡытлыса тороу пункттарында йәшәгән кешеләрҙең балаларына яңы йыл бүләктәре әҙерләнгән.

✓ **Республика Дәүләт Йыйылышы ултырышында "Башҡортостан Республикаһында выждан һәм дин тотоу азатлығы тураһында" Башҡортостан Республикаһы Законының 3-сө статьяһына үҙгәрештәр индереү тураһында" закон ҡабул итте.** Королтайҙа белдереүҙәренсә, закон проекты мәҙәни мираҫ йәки дини тәғәйенләнештәге объекттарҙағы һүрәттәрҙән дини символдарҙы алып ташлауҙы тыйырға тәҡдим итә. Бындай закон Башҡортостандың күп милләтле халҡының тарихи-мәҙәни мираҫын һаҡлау өсөн хоҡуҡи нигеҙҙәрҙе нығытасаҡ. "Закон проекты фотоһүрәттәрҙә, киң мәғлүмәт сараларында, рекламала һәм йәмғәт киңлегендә православие тәреләрен, мосолман ярым айҙарын һәм башҡа дини символдарҙы "юйыу" практикаһын туҡтатыуға йүнәлтелгән, - тип белдерҙе Башҡортостан парламенты спикеры Константин Толкачев. - Бындай ғәмәлдәр диндарҙарҙың ғына түгел, мәҙәни кешеләрҙең дә хистәрен мыҫҡыл итә". Уның һүҙҙәренсә, дини символдарға һаҡсыл, ихтирамлы мөнәсәбәт конфессия-ара тыныслыкты һәм йәмәғәт татыулығын нығытыуға, Башҡортостан халыҡтары өсөн уртаҡ булған традицион рухи-әхлаҡи ҡиммәттәрҙе һаҡлауға булышлыҡ итәсәк.

✓ **Башҡортостан архив документтары һаны буйынса Волга буйы федераль округында 7-се урынды биләй.** Был хаҡта Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә республиканың архив эштәре буйынса идаралығы начальнигы Илһам Фәткуллин хәбәр итте. Республиканың Дәүләт архивында 9 миллиондан ашыу документ һаҡлана. Архив фондының ҡиммәтле документтары 100 проценты менән цифрлаштырылған. Өфө Граждандар губернаторы канцелярияһы, Граждандар һуғышында, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусылар, КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитеты документтарын цифрлаштырыу дауам итә. Илһам Фәткуллин шулай уҡ республиканың архив эштәре буйынса идаралығы күрһәткән түләүле хеҙмәттәргә ихтыяж булыуын билдәләне. Мәҫәлән, тематик һорауҙарҙы үтәү, шәжәрә төҙөү, тәртипкә килтереү, прошивка, архив документтарын сканерлау кеүек хеҙмәттәр ҙур һорау менән файҙалана. Бынан тыш, 2020 йылдан архив ҡумталары етештереү башланған.

*РӘСМИ СЫҒАНАҠ*

# СПОРТ ТӨБӘГЕ БЕҘ!




**Мәскәүҙә физик культура һәм спорт өлкәһендәге иң абруйлы наградаларҙың береһе - Милли спорт премияһы еңеүселәрен бүләкләү тантанаһы үтте.**

Башҡортостан Рәсәйҙең иң яҡшы спорт төбәге тип танылды. Рәсәйҙең спорт министры Михаил Дегтярев Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировҡа еңеүсе дипломын тапшырҙы. Был еңеү - спортсыларҙың һәм уларҙың остаздарының, власть органдары вәкилдәренең, шулай уҡ республикабыҙҙа спортты ихлас яратҡан һәм уға әүҙем ярҙам иткәндәрҙең барыһының да уртаҡ тырышлығы һөҙөмтәһе, тип билдәләне республика етәксеһе. "Был награданы ҡыуаныслы хистәр менән өйгә алып ҡайтырмын һәм уға ҡатнашы булғандарға тапшырырмын. Улар - тренерҙар, методистар, физкультура уҡытыусылары, бөйөк спортсыларыбыҙ һәм спорт менән яңы шөғөлләнә башлаған малайҙар, ҡыҙҙар. Беҙ, үҙ сиратыбыҙҙа, балаларҙың спорт менән шөғөлләнеү мөмкинлеге, заманса физкультура-һауыҡтырыу комплекстары, бассейндар, спорт һарайҙары булһын өсөн эшләйбеҙ. Михаил Владимирович, ҙур рәхмәт. Беҙ Спорт министрлығы командаһы менән килешеп эшләйбеҙ. Был эште дауам итербеҙ", - тине Радий Хәбиров.

Билдәләнеүенсә, республика быйыл тағы ике номинацияла өс призер иҫәбенә инде. Фехтование буйынса олимпия резервындағы спорт мәктәбе - "Иң яҡшы спорт мәктәбе" номинацияһында, ә "Башҡортостандың адаптив спорт үҙәге" спорт мәктәбе "Рәсәй өмөтө: иң яҡшы спорт мәктәбе, иң яҡшы адаптив спорт ойошмаһы" номинацияһында билдәләнде. Быйыл "Рәсәй төбәге" номинацияһында Башҡортостан менән бергә Татарстан һәм Хабаровск крайы ла еңеүгә дәғүә итте.

# ҺӘР РАЙОНДА АСЫЛА

**Башҡортостандың һәр районында МХО-ла ҡатнашыусыларға ярҙам күрһәтеү үҙәктәре асыла.**

Республика Башлығы Радий Хәбиров хәбәр итеүенсә, бөгөн төбәктә 10 хәрби хеҙмәткәрҙәргә ярҙам үҙәге эшләй. Улар Стәрлетамаҡта, Октябрьскийҙа, Сибайҙа, Нефтекамала, Өфөлә, шулай уҡ Баймаҡ, Дәүләкән, Дүртөйлә, Ҡалтасы һәм Мәләүез райондарында урынлашҡан. "Махсус хәрби операция геройҙарына һәм уларҙың ғаиләләренә ярҙам итеү - төп бурыстарыбыҙҙың береһе. Ошо йәһәттән беҙ саралар исемлеген киңәйтеү өҫтөндә һәм был ярҙамды алыу уңайлы булһын өсөн эшләйбеҙ. Артыҡ бюрократияһыҙ, уңайлы шарттарҙа, бер урында", - тип билдәләне республика етәксеһе.

Радий Хәбиров республиканың һәр муниципалитетында ошондай үҙәктәр асыу бурысын ҡуйҙы. "Маҡсатыбыҙ - уларҙы һәр муниципалитетта асыу. Ошондай үҙәктәрҙә төрлө ярҙам күрһәтелә. Бында "Ватанды һаҡлаусылар" фондының социаль координаторҙары эшләй, улар ветерандарыбыҙҙы, туғандарын һәм яҡындарын юғалтҡандарҙы оҙатып йөрөй. Шулай уҡ төрлө саралар, шул иҫәптән республика министрлыҡтары һәм ведомстволарының күсмә ҡабул итеүҙәре ойошторола. Берҙәм ярҙам үҙәктәренә ярҙамға мохтаждар ғына мөрәжәғәт итмәй. Бында ярҙам күрһәтергә теләүселәр ҙә килә. Ундай кешеләр бик күп, уларҙың алдында түбәнселек менән баш эйәм", - тине Хәбиров.

# ЯҢЫ ЙЫЛҒА ӘҘЕРЛӘНӘБЕҘ

**Республика Башлығы Башҡортостанда яңы йыл сараларына әҙерләнеү һәм уны үткәреү буйынса ойоштороу комитеты төҙөү тураһындағы документҡа ҡул ҡуйҙы.**

Республикала Яңы йыл шыршыһы 2025 йылдың 25 декабрендә үткәрелә. Уны ойоштороу өсөн Башҡортостандың Мәғариф һәм Мәҙәниәт министрлыҡтары яуаплы. Райондарҙан һәм ҡалаларҙан Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың, хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең, хәрби һәм хеҙмәт бурысын үтәгәндә һәләк булған эске эштәр органдары хеҙмәткәрҙәренең балалары, яҡшы уҡыусылар, предмет олимпиадалары һәм спорт ярыштары еңеүселәре, художестволы үҙешмәкәрлек фестивалдәре лауреаттары, аҙ тәьмин ителгән ишле ғаиләләрҙе, шулай уҡ һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән, инвалид, етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балалар саҡырыла. Республика шыршыһында ҡатнашыусыларға Яңы йыл тамашаһы күрһәтелә һәм Яңы йыл бүләктәре тапшырыла. Бынан тыш, улар өс көн ял итә.

Башҡортостандың Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы Яңы 2026 йылға арналған баҫма продукция һәм символика әҙерләй. Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының баш идаралығына янғынға ҡаршы саралар үткәреү, йәлеп ителгән объекттарҙа дежурлыҡ ойоштороу йөкмәтелгән. Республиканың көс ведомстволары күмәк Яңы йыл сыралары үткәрелгән урындарҙа йәмәғәт тәртибен һаҡлай. Республиканың муниципаль райондары һәм ҡала округтары хакимиәттәре, профсоюз һәм йәмәғәт ойошмалары мәғариф һәм мәҙәниәт ойошмаларында, тораҡ пункттарҙағы майҙандарҙа Яңы йыл байрамдарын ойошторорға тейеш.

Документҡа ярашлы, муниципалитеттар үҙҙәренең һәм йәлеп ителгән аҡса иҫәбенә республикабыҙҙың Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың балалары, һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән, инвалид, аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙә тәрбиәләнгән балалар, етемдәр, Донецк Халыҡ Республикаһы, Луганск Халыҡ Республикаһы, Запорожье һәм Херсон өлкәләре, шулай уҡ Курск һәм Белгород өлкәләре, Сүриә Ғәрәп Республикаһы биләмәһенән ҡалдырып китергә мәжбүр булған граждандарҙың балалары өсөн Яңы йыл байрамдарын үткәреүҙе һәм бүләктәр тапшырыуҙы тәьмин итергә бурыслы.

**Ләйлә АРАЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ?  Ҡ А Й Ҙ А ?  Ҡ А С А Н ?

✓Мәләүез районында республика ҡала һәм район етәкселәренең семинары үтте. Унда Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров та ҡатнашты. "Беҙҙең семинар - биләмәләр үҫешенең көнүҙәк мәсьәләләрен хәл итеү, предприятие һәм ойошмаларҙың яҡшы иҡтисади хәлен һаҡлау, социаль йөкләмәләрҙе үтәү өсөн мөһим майҙан", - тип билдәләне Радий Хәбиров. Етәкселәр МХО-ла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаиләләренә ярҙам саралары, халыҡ менән эшлекле диалог ҡороу, инвестиция проекттарын тормошҡа ашырыу тураһында фекер алышты.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Ауыл тренеры" программаһында ҡатнашҡан Дыуан, Учалы, Яңауыл, Туймазы, Ишембай райондарынан биш кешегә бер тапҡыр бирелә торған 1 миллион һум күләмендә сертификаттар тапшырҙы. Программа 2020 йылдан тормошҡа ашырыла. Был ваҡыт эсендә дөйөм суммаһы 166,2 миллион һумлыҡ 207 уҡытыусы ярҙам алған. Программа буйынса түләүҙәр 600 мең һумдан 1 миллион һумға тиклем артты. Шулай уҡ 2024 йылдан "Ҡала тренеры" программаһы ла ғәмәлдә.

✓Башҡортостан спортсыһы Артур Зөлҡәрнәев Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәрендә билбау көрәше буйынса донъя чемпионатында еңеү яуланы. Был уның донъя кимәлендә һигеҙенсе тапҡыр еңеүе, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Билбау көрәше федерацияһынан. Белореттан Олимпия Мәхийәнова ла донъя чемпионатында алтын миҙалға лайыҡ булды. Яҡташыбыҙ донъя беренселегендә дүртенсегә еңеү яуланы. 2023 йылда ғына Олимпия Ҡаҙағстанда донъя чемпионатында икенсе урынды алды.

✓Башҡортостандың почта бүлексәләрендә Яңы йыл почтаһы эшләй башланы, тип хәбәр иттеләр Федераль почта элемтәһенең республика идаралығынан. Хаттарҙы 162390, Ҡыш Бабай йорто, Бөйөк Устюг, Вологда өлкәһе адресы буйынса ебәрергә кәрәк. Яуап алырға теләһәгеҙ, кире адресты һәм индексты күрһәтеү зарур. Ҡыш бабайға хатты ғәҙәти почта йәшниктәренә лә төшөрөргә мөмкин.

✓Республика заправкаларында ҡышҡы яғыулыҡҡа хаҡ артҡан. "Башнефть-Розница" компанияһының яғыулыҡ ҡойоу станцияларында ҡышҡы дизель яғыулығы ҡиммәтләнгән: бер литры водителдәргә 73,4 һумға төшә (+20 тин). Башҡа яғыулыҡ төрҙәренә хаҡ үҙгәрмәгән. Башҡа компанияларҙа, мәҫәлән, IRBIS заправкаһында дизель яғыулығының бер литры 69,99 һум тора. UFAOIL-да ДТ Евро - 70,97 һум. Башҡортостанда "Лукойл" заправкаларында "Дизель" өсөн уртаса хаҡ, russiabase.ru сайты мәғлүмәттәре буйынса, 74,25 һум тәшкил итә.

ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ

# МӨНӘСӘБӘТТӘР...

## асыҡ һәм ихлас булһын



**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев "Бөтә Өфө" телеканалының тура эфирында ҡала халҡы менән аралашты. Тура эфир ике сәғәттән ашыу дауам итте. Ошо ваҡыт эсендә ҡала етәксеһе бер нисә тиҫтә көнүҙәк һорауҙарға яуап бирҙе. Тура линияға бөтәһе 600-ҙән ашыу мөрәжәғәт килгән. Уларҙың барыһы буйынса ла яуаптар әҙерләнәсәк, тип вәғәҙәләнде. Һорауҙарҙың ҙур өлөшө транспорт, коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү, торлаҡ хужалығы өлкәләре менән бәйле булды.**

### Йыл нисек килер?

Алдағы йыл ябай булмаясаҡ, баш ҡалабыҙ ҙур килем алыр тип көтмәйбеҙ. Әммә был ҡайһы бер программалар ябыласаҡ тигәнде аңлатмай, тине Ратмир Мәүлиев тура бәйләнештә.

- Өҫтәмә финанс сығанаҡтар эҙләү бурысы тора беҙҙең алда. Был ер участкаларын конкурс процедуралары аша һатыу, даими файҙаланылмаған муниципаль мөлкәтте тотоноу булыуы ихтимал. Ошо йүнәлештә алып барылған эш һөҙөмтәһендә беҙ 50 мендән ашыу урам яҡтыртҡыстарын алмаштырҙыҡ.

Тағы бер тапҡыр һыҙыҡ өҫтөнә алып үтәм: йыл ауыр була, тип ҡәтғи раҫларға ярамай. Өҫтәмә килем сығанаҡтарын эҙләргә кәрәк. Ҙур сығымдарҙан түгел, ә бәләкәй килемдән ҡуркырға тейешбеҙ. Шуға күрә сығымдар буласаҡ һәм улар социаль инфраструктураны үҫтереүгә, социаль объекттар төҙөүгә, "Башҡорт ихаталары" проектына йүнәлтеләсәк.

Шулай уҡ квартал-ара юлдарҙа соҡорҙарҙы ямайбыҙ. Был - ҡала халҡының үҙәгенә үткән бик ауыр проблема. "Өйгә юл" программаһы нәҡ ошо маҡсатта ҡабул ителгән дә инде. Беренсе йылда был эштәргә 200 миллион һум бүленеү планлаштырыла.

Шуға күрә ҡаланы үҫтереүгә аҡса булһын һәм ҡала халҡының тормошо яҡшырһын өсөн барыһын да эшләйбеҙ, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды ҡала етәксеһе.

### Ҡала транспорты

Ратмир Мәүлиев тура эфирҙа йәмәғәт транспортына ҡағылышлы мәсьәләләргә аңлатма бирҙе.

- Йәмәғәт транспорты эшенә ҡарата ризаһыҙлыҡ сентябрҙә көсәйә һәм йәйге каникулдарға тиклем дауам итә, - тип билдәләне ул.

Мэр аңлатыуынса, трамвай юлдарын реконструкциялауға һәм яңы трамвайҙар һатып алыуға тәғәйенләнгән аҡсаны муниципаль предприятиены ҡотҡарып ҡалыу өсөн йүнәлтергә тура килгән.

- Беҙ 20 йыл элек кемдер ҡабул иткән ҡарарҙар өсөн иҫәпләшәбеҙ һаман. Был ҡала өсөн ауыр йөк, - тине етәксе.

Мәүлиев билдәләүенсә, яңыраҡ һатып алынған 69 берәмек Мәскәү трамвайҙары 2014-2016 йылдарҙа етештерелгән. Улар был төр транспорттың алмаш фондын булдырыу һәм запас частар өсөн кәрәк. Өфөлә йөрөгән иҫке трамвайҙар иһә үткән быуаттың 70-80-се йылдарында уҡ сығарылған.

Шулай уҡ ҡала троллейбустар һатып ала. Троллейбустар мәсьәләһен киләһе йылда тамам хәл итеү планлаштырыла. Әммә, мэр әйтеүенсә, кадрҙар - профессиональ водителдәр һәм механизаторҙар етешмәй. Хатта эш хаҡын арттырыу ҙа ярҙам итмәй.

Шулай уҡ Ратмир Мәүлиев, ҡалала түләүле парковкалар һаны артасаҡ, уларҙы өс мең урынға тиклем еткереү ҡарала, тип белдерҙе.

### Урамдары матур...

Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһе барышында республика Башлығы Радий Хәбиров Өфөнөң Октябрь революцияһы урамындағы тарихи объекттарҙы тәртипкә килтереүҙең мөһимлегенә иғтибар итте. Уның һүҙҙәренсә, бында 90-ға яҡын мәҙәни мираҫ объекты бар, улар был урамды ҡала өсөн айырыуса әһәмиәтле итә. Өфө мэры Ратмир Мәүлиевҡа был темаға айырым иғтибар бүлергә ҡушылды.

Ҡала башлығы тура эфирҙа был турала ла телгә алды. Билдәләнеүенсә, тарихи урамды реконструкциялау өс этапта бара. Беренсе - юл өлөшөн, шул иҫәптән тротуарҙарҙы, велосипед юлдарын реконструкциялау. Икенсеһе - мәҙәни мираҫ объекттарын тергеҙеү. Өсөнсөһө - мәҙәни мираҫ объекттары эргәһендәге территорияларҙы төҙөкләндереү, берҙәм йәйәү йөрөү киңлеген булдырыу. Эш барышында ҡайһы бер ҡатмарлыҡтар тыуа, өҫтәмә геологик эҙләнеүҙәр талап ителә. Быйыл йәй Ратмир Мәүлиев, "Возрождение" акционерҙар йәмғиәтендә урынлашҡан 8 объектта, бөтә кәрәкле документтар алғандан һуң, тергеҙеү эштәре башланасаҡ, тип хәбәр иткәйне.

- Шуныһы мөһим, беҙҙә тағы ла 10 мәҙәни мираҫ объектын тергеҙеүгә ҙур инвестор барлыҡҡа килде. Яҡын арала проектлауға тотоналар, - тип белдерҙе Өфө мэры. - Тағы ла 12 объектҡа инвестор эҙләйбеҙ. Хәҙер беҙ кешеләргә ошо объекттарға аҡса һалырға, ремонтларға тәҡдим итәсәкбеҙ. Киләсәктә урам АРТ-квадрат тибындағы, әммә үҙенең архитектура үҙенсәлеге менән яңы ижади киңлек буласаҡ...

### Дөйөм алғанда...

Бына инде бер нисә ай Өфө башлығы миллионлы ҡала мэрҙарының милли рейтингында иң юғары тәүге 5-әү иҫәбенә инә. Ратмир Мәүлиев билдәләүенсә, был - шәхси ҡаҙаныштар түгел, ә Өфө хакимиәте командаһының яйға һалынған эш һөҙөмтәһе.

Яуаптарҙы дөйөмләштереп, шуны билдәләргә мөмкин:

- ҡаланың алыҫ биҫтәләрендә урам яҡтыртыу селтәрҙәрен киңәйтеү;
- мәктәптәрҙә һәм балалар баҡсалары төҙөү һәм уларҙы модернизациялау;
- "Ҡала электричкаһы" проектын үҫтереү;
- Ағиҙел һәм Ҡариҙел йылғалары яр буйҙарын төҙөкләндереү;
- ҡар иретеү пункттары төҙөү;
- ҡала биләмәләрен йәшелләндереү буйынса эштәр әүҙем алып барыласаҡ.

Тура эфир барышында мэр ҡала, коммерцияға ҡарамаған ойошмалар һәм бизнес ҡатнашҡан хәйриә проекттарына айырым иғтибар бүлде.

Һөйләшеүҙе йомғаҡлап, Ратмир Мәүлиев, муниципалитет менән халыҡ араһындағы мөнәсәбәттәр асыҡ һәм ихлас булырға тейеш, тура бәйләнеш барышында һөйләшеү тап шундай булды ла инде, тине.

ҠЫҪҠАСА

# АСЫҠ ҺАУАЛА МУЗЕЙ

**Өфөлә асыҡ һауала музей булдырыла. Бының өсөн "Өфө - хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы" стелаһы эргәһендәге майҙансыҡ һайланған.** Өфө мэры Ратмир Мәүлиев ошондай йөкләмә бирҙе. Уның һүҙҙәренсә, хәҙер урында паровоз ҡуйыу эштәре алып барыла. Нигеҙе, шпалдар һәм рельстар һалынған. Поездың айырым элементтарын ҡуйыу башланған, уны декабрь башына тамамларға тейештәр. Тимер юл составы, шул иҫәптән локомотив, интерактив булыр тип планлаштырыла. Өфөләр һәм ҡала ҡунаҡтары машинист кабинаһына инеп, иҫтәлеккә фотоға төшә ала. "Өфө - хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы" стелаһының тирә-яғын күркәмләндереү эшен дауам итәбеҙ. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында өфөләрҙең хеҙмәт батырлығы менән таныштырыу өсөн асыҡ һауала музей булдырабыҙ. Беҙ башҡарған гәмәлдәр балаларыбыҙға атай-олатайҙарыбыҙ ҡаһарманлығы тураһында белергә ярҙам итер һәм уларҙа тыуған ҡалабыҙ, Ватаныбыҙ өсөн ғорурлыҡ тойғоһо тәрбиәләр тип ышанабыҙ", - тине Ратмир Мәүлиев.

✓ **9 декабрҙә Өфөлә, Ватан Геройҙары көнөндә, "Ватанға хеҙмәт итәм" республика форумы ойошторола. Был хаҡта Башҡортостан Башлығы ярҙамсыһы, республиканың МХО ветерандары ассоциацияһы рәйесе Оскар Ситдиҡов хәбәр итте.** Хәрби разведка офицеры билдәләүенсә, форум Махсус операция ветерандарына осрашырға, шулай уҡ аралашырға, тәжрибә уртаҡлашырға һәм дәүләт ярҙамын тойорға мөмкинлек бирә. Форум туғыҙ белем биреү майҙансығына бүленә, унда ҡатнашыусылар бизнес алып барыу темаларын тикшерә, үҙҙәре хаҡында һөйләй, муниципалитет вәкилдәре менән аралаша ала. Балалар һәм үҫмерҙәргә айырыуса иғтибар бирелә, уларҙың йәш геройҙар һәм МХО-ла ҡатнашыусылар менән осрашыу һөйләшеү мөмкинлеге бар. "Ҡатнашыусылар Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров менән осраша. Был иһә туранан-тура һорау биреү һәм иң юғары кимәлдә ярҙам алыу мөмкинлеге, - тип билдәләне Оскар Ситдиҡов. - Форум улар өсөн фекерҙәштәр табыу ғына түгел, ә йәштәргә остаз булыу, үҙҙәренең илһөйәрлек рухын һәм тәжрибәһен тапшырыу өсөн уңайлы майҙансыҡ булып тора".

✓ **Өфөлә 6 декабрҙә спорттың көс төрҙәре буйынса "Батырҙар алышы" турниры үткәрелә.** Республиканың Спорт министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, ярыш МХО ветерандарын реабилитациялау программаһы буйынса проект сиктәрендә ойошторола. Турнирҙа ҡатнашыусылар пауэрлифтингта, армрестлингта һәм стритлифтингта көстәрен һынай. Пауэрлифтинг буйынса спорт мастеры Альберт Мостафин әйтеүенсә, проект сиктәрендә һәүәҫкәр спортҡа демобилизацияланған 200 яугир йәлеп ителә. Улар өсөн профессиональ тренерҙар, клиник психолог менән кәңәшләшеү һәм республика ярыштарында ҡатнашыу ҡаралған. "Ир-егеттәр төрлө спорт төрҙәре менән шөғөлләнә. Минең дуҫым, МХО ветераны Олег Мөфтәхетдинов бер ҡул менән өҫтәл теннисы уйнай. Был иһә МХО-ла ҡатнашыусыларҙың һаулығын нығытыу, социаллаштереү өсөн мөһим", - тип билдәләне Альберт Мостафин.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓"Салауат Юлаев" буллит серияһында ЦСКА-ны еңде. Команда өс тапҡыр рәттән еңеү яулап, 31 уйындан һуң, 29 мәрәй менән Көнсығыш конференцияһының турнир таблицаһында 7-се урынға күтәрелде. Бынан алда "Салауат Юлаев" Астананың "Барыҫ"ын тар-мар иткәйне.

✓Химия буйынса халыҡ-ара олимпиадаларҙа ике тапҡыр еңеүсе Вадим Харисов һәм уның тренерҙары - Республика инженер лицей-интернатының химия уҡытыусылары Айнур Ғүмәров һәм БР Олимпиада хәрәкәте остаздары ассоциацияһы рәйесе Тимур Маннанов Рәсәй Президенты премияһына лайыҡ булды. Алтын миҙал өсөн премия бер миллион һум тәшкил итһә, еңеүселәрҙең остаздары 250 мең һум аласаҡ. Билдәле булыуынса, Вадим Харисов, Сәүд Ғәрәбстанында ICO халыҡ-ара олимпиадаһында Рәсәй исеменән сығыш яһап, алтын миҙал яулаған.

✓Федераль ойоштороу комитеты мәғлүмәттәренә ярашлы, Башҡортостан "Урманды һаҡлайыҡ" Бөтә Рәсәй акцияһы лидерҙары рәтенә инде. Республикала 21 мендән ашыу кеше ҡатнашлығында 500 меңдән ашыу ағас ултыртылған. "Ваҡытын һәм көсөн йәлләмәгән экологик башланғыстарҙы хуплаусыларға рәхмәт. Дөйөм тырышлыҡ менән был донъяны яҡшыраҡ итә алырбыҙ", - тип белдерҙе, был баһаның дөйөм ҡаҙаныш булыуын билдәләп, Башҡортостандың урман хужалығы министры Марат Шәрәфетдинов.

✓Республиканың Мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы идаралығы начальнигы Салауат Ҡолбахтин белдереүенсә, Башҡортостанда 5 788 мәҙәни мираҫ объекты асыҡланған, шуларҙың 1994-е Рәсәй берҙәм дәүләт реестрына индерелгән. 12 мәҙәни мираҫ объекты буйынса ремонт-реставрация эштәре тамамланған. Улар иҫәбендә Өфөләге "Сахаров йорто", "Степанов-Зориндар йорт биләмәһе", "Капкаевтарҙың килем йорто", "Поликарповтың торлаҡ йорто", "Тихониндар йорто" тип аталған мәҙәни мираҫ объекттар бар.

✓Башҡортостандан AY YOLA төркөмө интернетта иң популяр этник төркөм тип танылды. Өфө музыканттары Hit Music Awards 2025 музыкаль премияһын тапшырыу тантанаһында абруйлы наградаға алды. Шулай уҡ Өфөнөң Нотау төркөмө композицияһы "Интернетта иң популяр этник хит" наградаһына лайыҡ булды. Эксперт Олег Лузин билдәләүенсә, премия Shazam һәм iTunes кеүек донъя чарттарында юғары позициялар өсөн тапшырыла. Музыканттар гастролдәрҙә йөрөгәс, тантанаға килә алманы. Улар тыңлаусыларға рәхмәт әйтте һәм "Урал батыр" эпосының илебеҙҙә лә, унан ситтә лә популярлыҡ яулауын билдәләне.

"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан бик күп арҙаҡлы шәхестәребеҙ бар. Бөгөн балалар, йәштәр улар хаҡында бигүк хәбәрҙар түгел. Башҡорт мәктәбендә фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһендәр әйҙә.**

## ҒӘЙФУЛЛИН АБДРАХМАН ЗӘЙНУЛЛА УЛЫ

А.З. Ғәйфуллин - Бөйөк Ватан һуғышында батырҙарса һәләк булған яугир, уҡсылар полкының пулемёт ротаһы командиры, гвардия лейтенанты. Советтар Союзы Геройы. Ул 1908 йылдың 6 сентябрендә Өфө губернаһы Златоуст өйәҙе Яубүләк ауылында (хәҙерге Салауат районының Арҡауыл ауыл советы биләмәһенә ҡарай) крәҫтиән ғаиләһендә тыуа. Рәми Ғариповтың әсәһе Гөлмәрйәм Ғәйфуллинаның ике туған ағаһы. Тырыш, белемгә ынтылыусан егет Өфө ҡалаһында комвузда уҡый, уны тамамлағандан һуң тыуған яғына ҡайта, Арҡауылда МТС директорының сәйәсәт буйынса урынбаҫары вазифаһында эшләй. 1930 - 1932 йылдарҙа Ҡыҙыл Армия сафтарында хеҙмәт итә. 1935 йылда Өфөлә Башҡортостан коммунистик ауыл хужалығы юғары мәктәбен тамамлай. 1930-сы йылдарҙың икенсе яртыһынан БАССР-ҙың Миәкә һәм Малаяҙ райондарының партия органдарында эшләй.

1940 йылда яңынан хәрби хеҙмәткә саҡырыла, команда составын камиллаштырыу курстарын тамамлай. 1941 йылдың 5 июлендә Салауат районының хәрби комиссариаты хәрби белеме һәм тәжрибәһе булған егетте фронтҡа ебәрә. Гвардия лейтенанты А. З. Ғәйфуллин 1-се Белорус фронты составындағы 61-се армия частары (12-се гвардия уҡсылар дивизияһының 37-се гвардия уҡсылар полкы) алып барған яуҙарҙа пулемёт ротаһы менән командалыҡ итә, немец илбаҫарҙары менән алыштарҙа айырыуса ҡаһарманлыҡ һәм батырлыҡ күрһәтеп, боевой ордендар һәм миҙалдар менән бүләкләнә.

1945 йылдың 17 апрелендә ҡараған төндә, дошмандың көслө уты аҫтында, ҡул аҫтында булған нәмәләр ярҙамында ул үҙенең ротаһы менән беренселәрҙән булып Германияның Нойглитцен һәм Хоэнвутцен ҡасабалары районында Одер йылғаһын аша сыға. Пулеметтарҙан ут асып, Абдрахман Ғәйфуллиндың ротаһы дошмандың 6 атакаһын кире ҡаға, бик күп тере көсөн юҡ итә. Һөжүмдә башҡа подразделениелар йылғаны юғалтыуһыҙ сығыуға өлгәшә. Немецтар беҙҙең яугирҙар биләгән плацдармды кире алырға нисек итә. Гитлеровсыларҙың бер төркөмө А. Ғәйфуллин ротаһы ныҡынған траншеяға бәреп инә. Ҡул һуғышында уға дүрт немец һалдаты һөжүм итә, батыр командир уларҙың икеһен бысаҡ менән, ҡалғандарын пистолеттан атып үлтерә. Алыштың иң көсөргәнешле мәлендә гвардия лейтенанты Ғәйфуллин яугирҙарҙы штык контрһөжүменә күтәрә. Уның етәкселегендәге рота дошманды траншеянан бәреп сығара һәм плацдармды киңәйтә. Был алышта А. З. Ғәйфуллин батырҙарса һәләк була. Алыш урынында - Хоэнвутцен ҡасабаһында ерләнә. СССР Юғары Советы Президиумының 1945 йылдың 31 майындағы Указы менән командованиеның хәрби заданиеһын өлгөлө үтәгәне һәм немец-фашист илбаҫарҙары менән алыштарҙа күрһәткән ҡаһарманлығы өсөн гвардия лейтенанты Ғәйфуллин Абдрахман Зәйнулла улына үлгәндән һуң Советтар Союзы Геройы исеме бирелә.

Наградалары: "Алтын Йондоҙ" миҙалы, Ленин ордены, I һәм II дәрәжә Ватан һуғышы ордендары, Ҡыҙыл Йондоҙ ордены, боевой миҙалдар. Германияла герой ҡәберенә обелиск, Арҡауылда уның бюсы ҡуйылған, ауылдың бер урамына уның исеме бирелгән. А.З. Ғәйфуллин - Салауат районының почетлы гражданы.

БЕҘҘЕҢ БАЛАЛАР

# АТАЙ-ӘСӘЙҘӘР ҘӘ ХУПЛАЙ



**Беҙ барыбыҙ ҙа бала саҡ иленән, тимәк, балалар баҡсаһынан. Күп нәмә, хатта бәләкәй кешенең артабанғы яҙмышы уның ни тиклем уңайлы һәм файҙалы булыуына бәйле.**

Сабый туған телен ҡайҙан белә, ҡайҙа өйрәнә? Әлбиттә, әсәһенән, атаһынан, яҡындарынан. Ғаиләлә, өйҙә башҡорт телендә һөйләшәләр, аралашалар икән, балаға, үҙ телендә ғорурлыҡ менән һөйләшергә кәрәк, тип өйрәтелә икән, ул һәр ваҡытта ла туған телендә рәхәтләнеп аралашасаҡ. Ә инде балалар баҡсаһында һәм мәктәптә лә туған телде, тарихыбыҙҙы, мәҙәниәтебеҙҙе, йолаларыбыҙҙы өйрәнеү өсөн шарттар тыуҙырыла икән, киләсәк быуындың телде һаҡлап ҡалыуына ышаныс бар.

Беҙҙең Өфө ҡалаһының 167-се балалар баҡсаһында 1920 йылда башҡорт телен өйрәнеү төркөмө асылды. Был йүнәлештә эшләү өсөн беҙҙә тәжрибәле педагогик состав та, матди база ла, коллективтың илһамланып эшләү өсөн дәрте лә етерлек. Учреждениеның маҡсаты - балаларҙа башҡорт халҡының әҙәбиәтенә, мәҙәниәтенә, тарихына ҡыҙыҡһыныу уятыу һәм дә туған телдә һөйләшергә өйрәтеү. Ошо маҡсаттарҙы тормошҡа ашырыу өсөн тәрбиәселәребеҙ

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Ир-егет ниндәй сифаттарға эйә булырға тейеш тип уйлайһығыҙ? Ул сифаттар һеҙҙең үҙегеҙҙә бармы? Уларҙы нисек тәрбиәләргә?***

***Зәки ӘЛИБАЕВ, яҙыусы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәғариф хеҙмәткәре, Салауат Юлаев ордены кавалеры:*** Ир-егеттең төп сифаты - яуаплылыҡ. Нимәләр генә уйламаһын, ниндәй генә ғәмәлдәр ҡылмаһын, иң тәүҙә ул яуаплылыҡты тойорға тейеш. Был сифат кешенең бәләкәй сағында барлыҡҡа килһә, уның һуңғы көндәренәсә холҡона һеңеп ҡаласаҡ. Ирҙәрҙең тормошторағы барлыҡ эштәре ошо яуаплылыҡ менән билдәләнә: әгәр ул яуаплы икән, йәмғиәттә һәм башҡа ерҙәрҙә уның алдынғы ҡарашлы икәне күренәсәк. Тап ошо сифат кешенең башҡа төрлө матур-матур һыҙаттарына нигеҙ булып тора.

Әлбиттә, яуаплылыҡ бала саҡтан, атайҙар тәрбиәһенән башлана. Мин үҙем ауылда үҫкән кеше. Белорет районы Йөйәк ауылынан. Минең атайым Арыҫлан Сәфәрғәли улы Әлибаев 1925 йылда тыуған, быйыл 100 йыллығын билдәләп үттек. Бик йәшләй аталары мәрхүм булыу сәбәпле, үҙенең ҡустыһеңлеләрен ҡарап үҫтергән, донъя йөгөн индәренә бик иртә йөкмәгән кеше. Унан башҡа әсәйебеҙ менән 58 йыл бергә тормош көтөп, өс егет һәм дүрт ҡыҙҙы тәрбиәләп үҫтереп, аяҡҡа баҫтырғандар. Беҙгә бәләкәй ваҡыттан ваҡтөйәк, ауыл малайҙарына ғына хас эштәр ҡуша торғайнылар: үҙендең этенә үҙең ашарға биреү, мал ҡарау һәм башҡаһы. Ул эштәрҙе һинән башҡа береһе лә эшләмәй, тик һин генә уның өсөн яуаплылыҡ алаһың. Ата-әсә үҙенең улына типә-тиң күреп эштәр ҡуша, һуңынан ул эштең ни кимәлдә башҡарылғанын йә башҡарылмағанын ҡарай, һынай торғайны. Һәр нимәгә яуаплы ҡарарға шулай өйрәттеләр беҙҙе, сөнки тормошта һәр бер әйбер ир-егеттең ошо сифатына ҡайтып ҡала.

***Мирас ҮҘӘНБАЕВ, З. Исмәғилов исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институты студенты, "Мираҫ" йыр һәм бейеү ансамбле оркестры артисы:*** Ир-егет ниндәй сифаттарға эйә булырға тейешме? Был һорауға яуап итеп: "Ир-егет ағас ултыртырға, өй һалырға һәм үҙенең быуынын дауам итеүсе ул үҫтерергә тейеш", - тигән матур ғына бер халыҡ әйтемен килтерергә була. Мин шәхсән үҙем ошо биреләргә өс бурысҡа иғтибар бүләм.

Атайым, ауылдаштар менән йыш ҡына төрлө проекттарға ҡушылып, ағас ултыртабыҙ, был эшебеҙҙе артабан да дауам итер-

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Республика мәктәптәренә ялған бойороҡ таратыла. Сираттағы ялған мәғлүмәт тураһында Башҡортостан Хөкүмәтенең беренсе вице-премьеры Урал Килсенбаев хәбәр итте. Уның һүҙҙәренсә, республиканың белем биреү учреждениеларына ялған документ - ГУСП-ның 2025 йылдың 3 ноябрендәге 262-се ялған бойороғо таратыла. "Әлеге сараларҙы үткәреү тураһында рәсми бойороҡ юҡ. Был ялған документ. Был йәмғиәтте ҡаҡшатыуға, учреждениелар эшендә аңлашылмаусанлыҡ тыуҙырыуға һәм халыҡтың власть органдарына ышанысын бөтөрөүгә йүнәлтелгән. Уяулыҡ күрһәтеүегеҙҙе һәм провокацияға бирелмәүегеҙҙе һорайбыҙ. Мәғлүмәтте рәсми сығанаҡтарҙан тикшерегеҙ", - тип мөрәжәғәт итте ул республика халҡына.

✓Мәскәүҙә Кремлдең Екатерина залында тотош илдән урындағы үҙидара вәкилдәренә дәүләт наградаларын тапшырыу тантанаһы үтте. Сара Рәсәй Президенты хакимиәте етәксеһененең беренсе урынбаҫары Сергей Кириенко ҡатнашлығында үтте. Илгин районы хакимиәте башлығы, Башҡортостан Республикаһы Ҡатын-ҡыҙҙар союзы рәйесе Гүзәл Насирова II дәрәжә "Ватан алдындағы хеҙмәттәре өсөн" ордены миҙалы менән бүләкләнде.

✓Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, Башҡортостанда грипҡа ҡаршы вакцинация дауам итә, әммә был процедура ҡайһы берәүҙәргә ярамай. Прививканан баш тартыу өсөн сәбәптәр бар, тип белдерҙе СПИД-ты һәм йоғошло ауырыуҙарҙы иҫкәртеү, уларға ҡаршы көрәш буйынса республика үҙәгенең баш табибы Айгөл Ғәлиева. Иң башта тауыҡ аҡһымына аллергия, сөнки грипп вакцинаһы тауыҡ эмбриоңы нигеҙендә эшләйҙәр. Әгәр прививка ауыр реакция тыуҙырһа, уны яһатмаҫҡа мөмкин.

✓Башҡортостанда яңы йыл бүләктәре һәм хеҙмәттәре буйынса ҡыҙыу бәйләнеш асыла. 1 декабрҙән 30-ына тиклем Башҡортостандың Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау министрлығы республика халҡы өсөн яңы йыл тауарҙарының һәм байрам хеҙмәттәренең сифаты һәм хәүефһеҙлеге мәсьәләләре буйынса "ҡыҙыу бәйләнеш" ойоштора. Шулай уҡ операторҙар дәүгә йәки дәүгә ғариҙаһын яҙырға ярҙам итә. Эш көндәрендә иртәнге сәғәт 9-ҙан киске 6-ға тиклем +7(347) 218-09-78 номеры буйынса шылтыратырға мөмкин. Ведомствоға шәхсән мөрәжәғәт итергә була: Өфө ҡалаһы, Цюрупа урамы, 13, 703-сө бүлмә.

✓Башҡортостанда Әсә көнөндә 43 ҡатын-ҡыҙ әсә булған. Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры бәхетле ғаиләләрҙе балалары тыуыуы менән ҡотланы. Был хаҡта 30 ноябрҙә республиканың һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин хәбәр итте. Уның һүҙҙәренсә, ул көндә республиканың бала табыу йорттарында 22 малай һәм 21 ҡыҙ тыуған.

**✓ *Ғөмүмән, ир кешегә ғаиләле булыу һәм ғаиләһен лайыҡлы итеп ҡарау мотлаҡ тигән уйҙамын. Ә уның өсөн, беренсенән, спорт менән дуҫлыҡты өҙмәҫкә, насар ҡылыҡтарҙан арынырға, көслө булырға кәрәк.***



режим, режимдан тыш мәлдәрҙе, уйын ваҡыттарын, төрлө сараларҙы башҡортса ойоштора. Балалар баҡсаһында милли халыҡ байрамдарына, йолаларына ҙур иғтибар бирелә, балалар уларҙы йылы ҡабул итә, уларҙа туған телебеҙҙә аралашыу теләге уяна.

Беҙҙең тәрбиәселәр шәхсән дә, балалар менән дә бик күп төрлө конкурстарҙа, ярыштарҙа, хәҙер инде онлайн бәйгеләрҙә ҡатнашып тора. Фотоконкурс булһынмы, флешмоб, шиғырҙар бәйгеһе булһынмы, тәрбиәселәр балалар менән бергә үҙҙәренең һәләттәрен күрһәтә, призлы урындарға лайыҡ булалар. Ата-әсәләр менән дә тығыҙ бәйләнеш булдырылған, улар ҙа был сараларға әүҙем ҡушыла. Яңыраҡ ҡына, мәҫәлән, тәрбиәсе Оксана Ялалова үҙенең тәрбиәләнеүсеһе Райхан Ғарипова менән район кимәлендә үткән нәфис һүҙ оҫталарының "Илһам" ҡала смотр-конкурсында 1-се урын, ҡала кимәлендә Гран-при яуланылар. "Һаумы, һаумы әкиәт!" конкурсында ла йылда ҡатнашып, призлы урындар яулайҙар.

Балалар баҡсаһының тормошонда ата-әсәләрҙең роле бик ҙур. Улар тураһында ла айырым билдәләп үтмәй булмай, сөнки улар беҙҙең бар башланғыстарыбыҙҙы хуплай, ярҙам итә. Беҙ йыл һайын төрлө проекттарҙа ҡатнашырға тырышабыҙ. Күптән түгел "Урындағы башланғыстарҙы хуплау программаһын"да (ППМИ) ҡатнашыу буйынса йыйылыш булды. Балалар баҡсаһы мөдире Миләүшә Миниян ҡыҙы Шкурапет киләһе йылда ошо программала ҡатнашыу теләген белдерҙе һәм балалар баҡсаһының ҡоймаларын алыштырыу көнүҙәк мәсьәлә булыуын билдәләне. Конкурс шарттарын үтәп, беҙ был эштәрҙе атҡарып сығырбыҙ тигән уйҙабыҙ. Балаларҙың ата-әсәләре беҙҙең менән бер тулҡында тибрәлә, был дөйөм эшебеҙҙең балаларға уҡытыу-тәрбиә эшен алып барыу шарттарын уңайлыраҡ, сифатлыраҡ, хәүефһеҙлерәк итеү өсөн икәнен яҡшы аңлайҙар, шуға ла һәр башланғыстарыбыҙҙы күтәреп сығырға ғына әҙер торалар, шуның өсөн уларға ҙур рәхмәтлебеҙ.

**М. МИНИЯНОВА.**

беҙ тип уйлайым. Тәбиғәтебеҙҙе һаҡлау - ул беҙҙең киләсәгәбеҙҙе һаҡлау.

Өй һалыу мәсьәләһе минә әле ауыр, был әлеге заманда финанс яҡтан хәлдәр ҡатмарлаша төшөүе менән бәйле. Эйе, мин әле өйләнмәгәнмен, Аллаһ бирһә, һөйгән йәрем менән ғаилә ҡороп, яҡшы тәрбиәле, иманлы, рухлы баларар үҫтерергә ине. Киләһе быуындың ниндәй булыуы туранан-тура һинең биргән тәрбиәңә бәйле бит инде. Ғөмүмән, ир кешегә ғаиләле булыу һәм ғаиләһен лайыҡлы итеп ҡарау мотлаҡ тигән уйҙамын. Ә уның өсөн, беренсенән, спорт менән дуҫлыҡты өҙмәҫкә, насар ҡылыҡтарҙан арынырға, көслө булырға кәрәк.

Икенсенән, үҙ иленденң патриоты булыу, уны һаҡларға әҙер булыу мөһим.

Бынан башҡа ирегет иманлы булырға тейеш. Бөгөнгө көндә тап дини һәм рухи яҡтан дөрөҫ тәрбиә, минең күҙәтеүемсә, йәштәргә нығ етмәй. Үҙем әлеге ваҡытта намаҙҙа булмаһам да, был юҫыҡта һәр ваҡыт белемемде арттырыға тырышам.

Ә рухи тәрбиәгә килгәндә, төп эшемдән башҡа, Республика инженер лицей-интернатында ҡурайсылар ансамблен етәкләйем. Башҡорт сәнғәтен үҫтереү, уҡыусыларымды рухи яҡтан байытыу - минең хыял. Улар менән һәр көй, йырҙың тарихын ентекле өйрәнәбеҙ. Ҡаһым түрә, Шайморатовтар миҫалында уларға башҡортомда булған ҡыйыулыҡты, Ватаныбыҙға һөйөү тойғолары уятырға тырышам. Был эш еңелдән түгел, әлбиттә, уҡыусыларҙың төрлөһө бар бит. Әммә балаларҙың сәхнәлә ҡурай уйнап тороуҙарын, уларҙың ҡаҙаныштарын күреү минең өсөн ҙур ҡыуаныс.

Әйтеп киткән сифаттарҙы минең үҙемдә тәрбиәләгән атайыма - Нур Нурислам улына рәхмәтем сикһеҙ. Тап ул мине тормош һынауҙары алдында һынмаҫҡа, эштән ҡурҡып тормаҫҡа, нығ булырға өйрәтә һәм үҙе миңә өлгө булып тора.

**Айһылыу ДАУЫТОВА яҙып алды.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# БЕРҘӘМ ИЛДӘ БӘРӘКӘТ БАР,

## Ғауғалы илдә һәләкәт бар

**АҠШ президенты Дональд Трамптың Украина конфликтын тыныс көйләү планы буйынса фекер алышыуҙар дауам итә. Европаның сәйәси элитаһы Украинала тыныслыҡ урынлаштырыуға кәртә ҡороу үсе менән яна, Трампты үҙ яғына ауҙарыу ниәтенән арына алмай. АҠШ армияһының отставкалағы подполковнигы Дэниел Дэвис әйтеүенсә, Европа лидерҙары тарафынан Украинаның НАТО менән Евросоюзға инеүе фәҡәт ошо яҡтарҙың үҙ-ара эше тип белдерелеүе Вашингтондың хәрби хәрәкәттәрҙе туҡтатыу планына аяҡ салыу ҡурҡынысы менән янай.**

Европарламент депутаттары хатта шул сиккә барып етте: Украина буйынса тыныс килешеүгә өлгәшеү өсөн, йәнәһе, Рәсәй Ҡырым менән Донбастан үҙенең хәрби көстәрен сығарырға тейеш. Быны Ҡырым Республикаһының Дәүләт советы рәйесе Владимир Константинов Украина конфликтын тыныс көйләүгә ҡаршы йүнәлдерелгән Европа стратегияһы, тип атаны. Ошондай белдереүҙәр өсөн Европарламенттың бер ниндәй вәкәләтлеге юҡ һәм ул уставта ла ҡаралмаған. Европа илдәренең Ҡырымды Рәсәй территорияһы тип таныу-танымауы беҙгә кәрәк түгел, тип өҫтәне Константинов.

Венгрия премьер-министры Виктор Орбан әйтмешләй, Евросоюз илдәре етәкселәре үҙҙәренең еңелеүен таныу кимәленә етмәгәндәр әле, ләкин ундай көн ҡасан да булһа тыуасаҡ. Әйткәндәй, 28 ноябрҙә Евросоюз янауҙарына ҡарамаҫтан, Орбан ҙур делегацияһы менән Мәскәүгә килде һәм Рәсәй Президенты Владимир Путин менән осрашты. Германия канцлеры Фридрих Мерцтың, Орбан Рәсәйгә Евросоюз хуплауынан тыш һәм бындай һөйләшеүҙәргә мандатһыҙ барҙы, тип ғәйепләргә маташыуына ҡаршы Венгрияның сит ил эштәре министры Петер Сийярто: "Беҙгә, венгрҙарға, бының өсөн Европаның рөхсәте лә, мандаты ла кәрәкмәй. Венгрия суверенлы, үҙаллы дәүләт һәм беҙ тәү сиратта үҙебеҙҙең милли мәнфәғәттәрҙән сығып эш итәбеҙ", - тип яуап бирҙе. Милли мәнфәғәт, тигәндән, был хаҡта Виктор Орбан: "Мин Мәскәүгә Венгрияны ҡышҡылыҡҡа һәм киләһе йылға ла арзан хаҡҡа энергия ресурстары менән тәьмин итеү мәсьәләһе буйынса һөйләшергә барам", - тип аңлатма бирҙе. Үҙенең премьерлыҡ осоронда ул Рәсәй лидеры менән 14-се осрашыуға килеүе һәм өлгәшелгән килешеүҙәр һөҙөмтәһендә ике яҡлы хеҙмәттәшлекте үҫтереү буйынса байтаҡ эштәр башҡарылыуын билдәләне. 2025 йыл башынан алып Рәсәйҙән Венгрияға 8,5 млн тонна нефть һәм 7 млрд кубометр тәбиғи газ килгән. Евросоюз баҫымына ҡарамаҫтан, Будапешт Рәсәй энергетика ресурстарынан баш тартырға йыйынмай, киреһенсә, хеҙмәттәшлекте үҫтереү яғында. Рәсәй Президенты менән дүрт сәғәткә яҡын һөйләшеүҙәр барышында, әлбиттә, Украина конфликтына ҡағылышлы мәсьәләләр буйынса ла фекер алышыуҙарға форсат булды. Ошо йәһәттән Виктор Орбан тағы бер тапҡыр Будапешттың Рәсәй-АҠШ саммитын үткәреү урыны булараҡ әҙерлеген белдерҙе һәм һөйләшеүҙәрҙең уңышлы үтеүе өсөн бөтөн мөмкинлектәрҙе файҙаланып, булышлыҡ итәсәге хаҡында әйтте.

Ҡушма Штаттар иһә бынан ары Украина һәм Евросоюз ихтыяры менән иҫәпләшеп тормаясағын белдерә. Американың сәйәси аналитигы Грэм Фуллер фекеренсә, Трамп Зеленский менән Европаға ҡаршы "ҡаты уйнай" башлаясаҡ. "2014 йылда Америка дипломаты һәм сәйәсмән Виктория Нуландтың "Шайтаныма китһен Евросоюз!"тигән һүҙҙәре иҫкә төшә. Был һүҙҙәр бөгөн дә көн ҡаҙағында. Европаның аҡсаһы, етди ҡоралы ла, планы ла юҡ. Ул үҙенең кем һәм нимә икәнлеген, ҡайҙа табан барыуын һәм ахырғы маҡсатының ни икәнен дә аңламай, буғай. Трампҡа ла Нуландтың әлеге "Шайтаныма - Евросоюз!" тигән һүҙҙәрен ҡабатлау өсөн күпме ваҡыт кәрәк булыр икән?"- тип һөйләне Грэм Фуллер Dialogue Works YouTube каналына әңгәмәһендә. Һәм, ысынлап та, үткән аҙнала Аҡ йорт Украиналағы хәлде көйләү буйынса тәҡдимдәрҙе эшләүе хаҡында хәбәр итте. Сит ил баҫмалары мәғлүмәттәренә ҡарағанда, көйләү планы Донбасс территорияһын Мәскәү ҡарамағына биреү, уны һәм Ҡырымды Рәсәйҙеке тип рәсми таныу, Запорожье менән Херсон өлкәләренең күпселек өлөшө сиктәрен бәрелеш һыҙығында туҡтатыу, Украина армияһы һалдаттары һанын һәм ҡоралын ике тапҡырға кәметеү, Украинала Рәсәйҙең төпкөл төбәктәренә һөжүм итеү ихтималы булған сит ил ғәскәрҙәре һәм ҡоралын урынлаштырыуҙы тыйыу пункттарын үҙ эсенә ала.

Владимир Путин пландың ошо тәүге варианты менән танышып сығыуын һәм уның киләсәккә килешеүҙәр нигеҙе булыу мөмкинлеген, ләкин һәр пунктты ентекләп тикшереп сығыу кәрәклеген белдерҙе. Әйткәндәй, Кремлдә белдереүҙәренсә, Президент Путин 4-5 декабрҙә Һиндостанда эш сәфәре менән була. Ә шуға тиклем Трамптың махсус вәкиле Стив Уиткоффтың Мәскәүгә килеүе көтөлә.

Киев режимы башлығы Владимир Зеленский 29 ноябрҙә үҙенең телеграм-каналында Украина делегацияһының АҠШ-ҡа һөйләшеүҙәргә килеүе хаҡында яҙҙы һәм тиҙҙән конфликтты туҡтатыуға булышлыҡ итеүсе "ниндәйҙер" саралар ҡабул ителәсәге тураһында белдерҙе, ләкин ниндәй саралар хаҡында һүҙ барыуын асыҡламаны. Халыҡҡа үҙенең яңыраҡҡы бер мөрәжәғәтендә ул Украинаның ҡатмарлы һайлау алдында тороуын әйтеп, "Йә үҙебеҙҙең дәрәжәне, йәки төп партнерыбыҙҙы юғалтасаҡбыҙ. Йә 28 пункт, йә көтөлгән иң ауыр ҡыш", тигәйне, мөһим партнер йөҙөндә АҠШ-ты күҙҙә тотоп, моғайын. РФ Президентының матбуғат секретары Дмитрий Песков: "Һөйләшеүҙәрҙе һуҙыуҙың һәр бер көнө Зеленский өсөн һәләкәт ул", тине һәм уның Украиналағы көрсөк хәлдәр шарттарында президент булараҡ үҙ бурыстарын башҡара алмауын белдерҙе.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Боксер Алина Муллағолова Өфөлә бокс буйынса Рәсәй чемпионатында юғары наградаға лайыҡ булды. Ул беренсе ауыр алышта (48 килограмлыҡ категорияла) Иваново өлкәһенән Алеся Патлайҙы еңеп, спорт мастеры исемен яуланы. Алыштан һуң Башҡортостан спортсыһы "Башинформ"ға үҙенең тәьҫораттары хаҡында һөйләне. Алина Муллағолова - Өфөнөң Николай Валуев исемендәге бокс мәктәбе тәрбиәләнеүсеһе, тренеры - Алишер Насилобеков.

✓Өфө ҡалаһының Дим районында урынлашҡан 75-се һанлы "Аҡбуҙат" Башҡорт балалар баҡсаһында 27 ноябрҙә Әсәйҙәр көнөнә арналған "Алтын тирмә" интеллектуаль уйыны үтте. Викторинала ҡатнашыусы әсәйҙәрҙең "Күңелле бал ҡорттары" һәм "Яғымлылар" командаларына ғаилә һәм традицияларға ҡағылышлы һорауҙарға яуап бирергә кәрәк ине. Сара барыһына ла оҡшаны. "Тәрбиәсе - һәр әсәйҙең көндәлек ярты ролен үтәүсе булып тора. Рәхмәт һеҙгә тәрбиә өсөн", -тип рәхмәт һүҙҙәрен еткерҙе әсәйҙәр.

✓Өфөлә Конгресс-холда XVIII Халыҡара бизнес аҙналығы үтә. Сараның эшлекле программаһы иҡтисад, экспорт, инновациялар һәм инвестициялар кеүек өлкәләрҙә партнерлыҡты киңәйтеү мәсьәләләренә арналған. Ҡатнашыусылар һәм ҡунаҡтар пленар ултырыштар, түңәрәк өҫтәлдәр, тармаҡ секциялары, шулай уҡ b2b контакттар биржаһы форматында бизнес-мөхитте үҫтереүҙең ағымдағы шарттарын һәм перспективаларын тикшерә.

✓Өфөнән тарих уҡытыусыһы Садиҡова Юлиә Наил ҡыҙы "Иң яҡшы педагогик ҡараш" номинацияһында йәштәргә тарих буйынса белем биреү өлкәһендә 2-се урын алып, "Тарих тауышы" Бөтә Рәсәй премияһының призеры булды. Премияны тапшырыу 28 ноябрҙә Мәскәүҙә Третьяков галереяһының концерт залында үтте. Конкурсҡа Рәсәйҙең 87 төбәгенән, шулай уҡ биш сит илдән 1775 ғариза килгән була. Юлиә Садиҡова Өфөнөң үҙенең новаторлығы менән билдәле "Яңы мәктәп" ("Новошкола") мәктәбендә уҡыта.

✓11 декабрҙә "Китап" магазинында "По-Читатели книг" проекты сиктәрендә китап һөйөүселәр өсөн артистар ҡатнашлығында матур сара була. Унда ҡатнашыусыларҙы көн дауамында тере моң, китаптар тураһында әңгәмә көтә. Илшат Абдуллин ("Бүреләр" төркөмө солисы), Лиана Хәбибуллина, Рөстәм Ғиззәтуллин, Baby Ti, Ринат Зарипов ("Дәрүиш-хан" төркөмө солисы), Ильяс Батыргәрәев һәм башҡалар сығыш яһай.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*✔ Йәш егеттәребеҙ туристарҙы йәлеп итеү, йәшәү шарттары булдырыу, экскурсиялар ойоштороу кеүек эшҡыуарлыҡ төрҙәрен үҙләштерә. Ҡайҙа барып төртөлөргә белмәй, туҡтар урын таба алмай йөрөгән туристар юҡ хәҙер.*



## ТУРИСТ ҺУҠМАҒЫ



# ЯНҒАНТАУ

**Янғантау - Башҡортостандың иң үҙенсәлекле һәм билдәле урындарының береһе. Ул Салауат районында урынлашҡан. 1965 йылдан тәбиғәт ҡомартҡыһы статусын йөрөтә.**

Тауҙың бейеклеге диңгеҙ кимәленән 504 метр. Уның түбәһендәге ярыҡтарҙан, был урындарҙа вулкан әүҙемлеге булмаһа ла, һәр ваҡыт эҫе пар ағымы сыға. Ер өҫтөнә күтәрелгән газдарҙың температураһы сығыу урынында плюс 37-нән 150 градусҡа тиклем тирбәлә, ә 90 метр тәрәнлеккә быраулаған скважинала температура 380 градусҡа етә.

Тауҙа бөтәһе биш "ҡыҙыу" нөктә табылған. Тикшеренеүселәр асыҡлауынса, уларҙың иң юғары температуралыһы тауҙың көньяҡ битләүендә. Әлегә тиклем ғалимдар араһында серле Янғантау тауы феноменын аңлатыусы берҙәм фекер юҡ. Тауҙың төпкөләндә, 60 - 90 метр тәрәнлектә, битумлы мергелдәр (тәрәндә баҫым аҫтында тығыҙлынған эҙбиз, балсыҡ һәм ләмдән торған ҡаты тау тоҡомо) яна, тигән фараз киң таралған.

Тауҙан сыҡҡан йылы быуҙың шифаһы тураһында борондан белгәндәр. Риүйәттәрҙә әйтелеүенсә, Янғантауҙың сәйер һәм ғәжәйеп шифалы үҙенсәлектәрен тәү башлап бынан бер нисә йөҙ йыл элек тау битендә һарыҡ көткән ҡарт асҡан. Көҙгө ямғырлы көндә ул ҙур ағас янындағы ер ярығына тап була. Шунда ҡоро япраҡ, сатыр-сотор ботаҡтар түшәп, ятып торған һәм үҙе лә һиҙмәҫтән йоҡлап та киткән. Уянғас, ярыҡтың төбөнән йылы быу сыҡҡанын тойоп ҡалған. Аҙаҡтан ул бында йыш ҡына йылынырға йөрөгән. Бер ни тиклем ваҡыттан үҙен йонсоткан аяҡ һәм ҡул быуындары һыҙлауының баҫылғанына аптырап ҡалған. Нәҡ ошо дәүерҙән быға тиклем "Карағоштау" тип йөрөтөлгән был урынға "Янғантау" тигән яңы исем ҡушыла. Яҡын-тирәлә йәшәгән башҡорттар уны "изге" тип һанай башлай. Янғантауға күп ауырыуҙар дауаланырға килгән.

Тауҙың үҙенсәлекле күренештәрен тәү тапҡыр XVIII быуаттың икенсе яртыһында, 1770 йылдың 26 майына ҡараған үҙенең көндәлек яҙмаларында, академик Петер Симон Паллас һүрәтләй. "Асыҡ тишек һәм ярыҡтарҙан бер туҡтауһыҙ эҫе быу сығып тора, уға ҡул тейгеҙерлек түгел. Унда ташланған ағас ҡабығы һәм ҡоро юныҫҡы шундуҡ янып китә, насар көндә һәм ҡараңғы төндә был быу бер нисә аршин бейеклегендәге йоҡа ғына ҡыҙыл ялҡын йә утлы шар булып күренә..." - тип яҙа ул "1767-1771 й.й. Рәсәй дәүләтенең төрлө провинциялары буйлап сәйәхәт" тип аталған китабында.

1937 йылда Янғантауҙа 20 урынлыҡ дауалау йорто асыла, ә 1944 йылда ул аяҡ-ҡул быуындары һыҙлауын, периферик нервы системаһы һәм ҡан тамырҙары, ашҡаҙан-эсәк, бөйөр һәм һейҙек юлдары ауырыуҙарын дауалауға тәғәйенләнгән 25 урынлыҡ шифаханаға әйләндерелә. 1957 йылдан йыл әйләнәһенә эшләй башлай. Бөгөн күп йүнәлешле бальнеология курорты бер юлы 840 кешене ҡабул итә ала.

Шифахананың төп дауалау факторы - ер аҫтынан сыҡҡан быу һәм составында әүҙем микроэлементтар, органик һәм гумус матдәләр, спиртлы сумала булған газ. Ул матдәләр алмашыныу процесын көсәйтә, ҡанды яҡшырта, липид һәм аҡһым алмашыныуын нормалләштерә.

Янғантауҙан 6 саҡрым алыҫлыҡта аҙ минералләшкән Ҡорғаҙаҡ шишмәһе аға. "Янғантау" республика ҡурсаулығы биләмәһенә инә.

**Байгилде МОТАЛЛАП әҙерләне.**

## БАШ ҠАЛАЛА...

**Һуңғы йылдарҙа республика районадры вәкилдәренең баш ҡалалағы яҡташтары, йәштәр менән осрашыуҙар, кисәләр, күргәҙмә, концеттар ойоштороуы үҙенә күрә матур бер йолаға әйләнеп бара. Күптән түгел Өфөлә Әбйәлил һәм Баймаҡ райондары осрашыуы гөрләп үтһә, 26 ноябрҙә иһә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында Бөрйән районы вәкилдәре "Бөрйән - башҡортомдоң рух бишеге" патриотик-хәйриә акцияһы сиктәрендә йәмле, күркәм сара ойошторҙо. Шул сара мәлендә беҙ Бөрйән районы хакимиәте башлығы Рәмил Миңлеәхмәт улы АБДУЛЛИНға бер нисә һорау менән мөрәжәғәт иттек.**

# БӨРЙӘНДӘР ОСРАШТЫ...

## бөрйәндәр менән



**➔ Баш ҡалала ошондай матур сараны ниндәй маҡсаттар менән уҙғараһығыҙ?**

- Ошо арала районыбыҙҙың 95 йыллыҡ юбилейын билдәләгәйнек, шуға арнап, районда матур-матур саралар үткәрҙек. Байрам рухын Өфө ҡалаһында йәшәгән яҡташтарыбыҙ менән дә уртаҡлашырға ҡарар иттек бына. Әлбиттә, Өфө менән Бөрйән араһы бик яҡындан түгел, шуға ҡарамаҫтан, бик теләп ойошторҙоҡ сәфәребеҙҙе. Күргәҙмәләр, мәҙәни программаларҙ алып килдек. Тамаша күрһәтеү генә түгел, ә тыуған ягыбыҙҙың үткәнен, бөгөнгөһөн, киләсәген ҡуҙаллап, һөйләшеп, алдыбыҙға төрлө мәсьәләләр ҡуйып, уларҙы сисеү юлдарын бергәләп билдәләп ҡайтыу ҙа маҡсатыбыҙ. Студенттар, районадн сыҡҡан оло быуын кешеләре менән осрашыу, күҙгә-күҙ ҡарашып һөйләшеү - иң мөһиме. Сөнки Өфөлә йәшәгән яҡташтар ҙа район тормошонда ҡатнашырға, тамырҙарын онотмаҫҡа тейештәр, тигән уйҙабыҙ.

Сараны Бөрйән яҡташтар берлеге менән берлектә ойоштораbыҙ. Был ойошманың етәксеһе Ришат Хәжғәле улы Сабитовҡа айырыуса ҙур рәхмәт әйтеп үтергә кәрәк. Ул теүәл бер йыл элек, мин район етәксеһе булып эшләй башлағас та, Өфөләге яҡташтарҙы бергә йыйыу теләген белдергәйне. Шулай уҡ яҡташыбыҙ, Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Ивнәй ҡыҙы Шафиҡованың районыбыҙға күрһәткән ярҙамы баһалап бөткөһөҙ.

**➔ Ҡалаларҙа йәшәгәндәр тыуған районадрына ҡайтһа, күберәк ундағы етешһеҙлектәрҙе күрергә, дөгүә белдерергә әүәҫ. Өфөләге бөрйәндәр һеҙгә ниндәйерәк һорауҙар менән мөрәжәғәт итә?**

- Баш ҡалала, ғөмүмән, ҡалаларҙа йәшәү кимәле, әлбиттә, юғары, ауылдарға ҡайтһаң, уңайлыҡтар йәһәтенән етешһеҙлектәр күҙгә ташлана ла тора инде: ҡайҙалыр газ, һыу юҡлыҡы, ҡайҙалыр юл проблемаһы киҫкен икәнлеге иғтибарҙы йәлеп итәләр. Рәхәт тормошҡа өйрәнгән кеше тыуған ауылында ла шундай уҡ уңайлыҡтарҙы күргеһе киләләр. Әммә тәңкит урынлы ла, урынһыҙ ҙа булырға мөмкин. Әлеге көндә мөмкинлектәр бер ни тиклем сикләнгән булһа ла, беҙҙең районда ла бөгөндән алып эшләрлек тә, тамамларға күпмелер ваҡыт талап иткән эштәр ҙә билдәләнгән. Инфраструктураны яҡшыртыу өҫтөндә эш бара: спорт, балалар майҙансыҡтары төҙөлә, өйҙәргә газ үткәрелә. Күпләп яңынан-яңы йорттар төҙөлә, емерелеп, ауылдарҙы ҡотһоҙлап ултырған өйҙәр кәмей кәҙәр. Беҙ тормошобоҙҙо, районыбыҙҙы матурларға, йәнләндерергә тырышабыҙ. Был йүнәлештә эҙмә-эҙлекле эштәр атҡарабыҙ. Нисек кенә булмаһын, ауылдарҙа тормош насар тип әйтмәҫ инем. Унда ла яҡшы итеп йәшәп була, теләк кенә кәрәк. Быға миҫалдарҙы бик күпләп килтерергә мөмкин. Ә шулай ҙа беҙ урындағы халыҡтың теләгенә лә, тәҡдименә лә асыҡбыҙ, тәнҡитте лә ҡолаҡҡа элабеҙ. Етәксе эше халыҡ тауышына яраштырылы ойоштороla ла инде ул.

**➔ Йәштәр менән осрашыуҙың маҡсаты, моғайын, уларҙы киләсәктә үҙегеҙҙең кадрҙар итеп күрергә теләүҙәндер бит инде? Районға ниндәй һөнәргә эйә йәштәрҙе, белгестәрҙе ҡайтарырға кәрәк?**

- Эйе, кадрҙар мәсьәләһе киҫкен тора, Бөрйән районы был йәһәттән башҡа райондарҙан бик үк айырылмай. Етәкселәр ҙә, төрлө өлкәләге белгестәр ҙә кәрәк. Әлегерәк табиптарға ҡытлыҡ булһа, әлеге көндә, мәҫәлән, уҡытыусылар етешмәй, бигерәк тә айырым предметтарҙан уҡытҡан белгестәр, хатта физкультура уҡытыусыһына мохтажлыҡ бар. Бюджет өлкәһендәге эшкә йәштәр бик ылыҡмай. Өфөгә, Рәсәйҙең башҡа ҡалаларына уҡырға инһәләр, йәштәребеҙ ауыл еренә ҡайтырға бик ашыҡып бармайҙар. Студенттар менән ошо проблеманы уртаға һалып һөйләшер өсөн осраштыҡ та инде.

Йәш белгес районға эшкә ҡайтһа, әлбиттә, йәшәргә урыны ла, йорт һалырға ере лә кәрәк. Был йәһәттән дә беҙ ярҙам ҡулы һуҙырға, мәсьәләне хәл итешергә әҙербеҙ. Ҡуртымға бирерлек торлаҡ булмаған осраҡта коммуналь түләүҙәрҙең 50 процентына ҡәҙәре түләшеү мөкинлеге бар. Тәүге осорҙа аҡсалата ярҙам, ер, төҙөләш өсөн ағас материалдар мәсьәләһе буйынса ла һорауҙар хәл итерлек.

**➔ Бөрйәндең киләсәге туризм үҫеше менән бәйле, тигәнде йышыраҡ ҡабатлайҙар хәҙер...**

- Эйе, хәҙерге көндә Бөрйәнгә "төпкөл" тигән төшөнсә бөтөнләй тура килмәй. Районда йөмғеһе 17 мең халыҡ йәшәй. Туризм миҙгеле асылған осорҙа, йәй башынан алып көҙгә тиклем, районға йөҙ меңгә яҡын кеше килә, халыҡ күләме 5-6 тапҡырға арта. Урындағы халыҡ хәҙер был хәлгә аҡрынлап өйрәнә, был осорҙоң файҙаһын күреп ҡалырға тырыша. Кәсепселек йәйләп тергеҙелә бара, үҙебеҙҙә етештерелгән продукцияны һатыу эше яйға һалына. Бигерәк тә ағинәйҙәр тарафынан балаҫ һуғыу, милли костюмдар тегеү, төрлө биҙәүестәр, ҡул эштәре менән шөғөлләнеү кеүек милли кәсептәр тергеҙелә. Ул әйберҙәр килгән туристарҙы ла ҡыҙыҡһындыра.

Туризм - Бөрйәндең киләсәге. Туристар бығаа тиклем дә ынтылып торҙо беҙҙең яҡтарға, ләкин күберәген ҡырағай туризм хөкөм һөрә ине. Хәҙер заманса, цивилизациялы туризмға ынтылабыҙ. Йәш егеттәребеҙ туристарҙы йәлеп итеү, йәшәү шарттары булдырыу, экскурсиялар ойоштороу кеүек эшҡыуарлыҡ төрҙәрен үҙләштерә. Ҡайҙа барып төртөлөргә белмәй, туҡтар урын таба алмай йөрөгән туристар юҡ хәҙер, был йәһәттән бар шарттар ҙа тыуҙырыла. Хәҙер туризмды йыл әйләнәһенә ойоштороrлоҡ итеп эшләү өҫтөндәбеҙ. Ҡыш көндәрендә лә йәшәрлек турбазалар, саңғы шыуа торған комплекстар төҙөлә. Быltыр, мәҫәлән, Шүлгәнташҡа боролған ерҙә тәүге тапкыр саңғы шыуыу трассаһы асылды. Шундай объекттарҙы күберәк булдырыу өҫтөндәбеҙ. Был йәһәттән урындағы инциативаларға, үҙебеҙҙең эшҡыуарҙарға гранттар, субсидиялар алышырға ярҙам итешәбеҙ. Гранттарға документтар тапшырған йәш эшҡыуарҙар күбәйә хәҙер, шуныһы ҡыуаныс.

**Шулай итеп, Бөрйән районы хакимиәте башлығы менән осрашыу барышында йәштәрҙе күберәген үҙҙәре уҡыған йүнәлештәр - уҡыу-уҡытыу, медицина, туризм өлкәһендәге хәл торошо ҡыҙыҡһындырҙы. Тыуған яҡта тормош кимәлен яҡшыртыу тураһында ла борсола улар, шуға ла ауылдарға газ, юл, интернет үткәреү тураһында һорауҙар йыш яңғыраны. Тыуған тел темаһы ла урап үтелмәне. Әйткәндәй, студенттар "Әгәр ҙә мин Бөрйән районы хакимиәте башлығы булһам, нимәләр эшләр инем?" тигән һорау алыуҙа ҡатнашып, өр-яңы идеяларын, тәҡдимдәрен яҙып та ҡалдыра алды. "Былай осрашыуҙарҙы йышыраҡ үткәреп тороу бик файҙалы булыр ине. Сөнки йәштәр йыш ҡына үҙҙәрен борсоған һорауҙар менән кемгә мөрәжәғәт итергә белмәй. Мин үҙем Бөрйән йәштәре берлеге ағзаларының районға ҡайтып, саралар үткәреү өсөн ниндәй ярҙамға өмөт итә алыуы тураһында һәм шул уҡ берлектең киләсәге булырлыҡ мәктәп уҡыусыларын туплау тураһында һорауҙар бирҙем, икеһенә лә тулы яуап алдым", - тине Бөрйән йәштәре берлегенең етәксеһе Заһит Ғиззәтуллин.**

**Айһылыу ДАУЫТОВА әңгәмәләште.**

✓ *Усть-Уфимское тип аталған ҡаласыҡ Өфө йылғаһы тамағы тәңгәлендә, Президент-Отель районында йылғаның бейек морононда урынлашҡан, ә Салауат Юлаев һәйкәле янындағы майҙан территорияһында Өфө-4 ҡаласығы табыла.*



*ТАРИХИ ЙЫЛЪЯҘМА*

# ӨС ЙЫЛҒА САТЫНДАҒЫ ҠАЛА,

## йәки Нисә йәш һиңә, Өфө?

### (Салауат Хәмиҙуллиндың видеофильмы буйынса)



***Салауат Хәмиҙуллин:*** Совет осоронда цивилизациялы донъяның күсмә периферияһы тип һаналған Көньяҡ Урал территорияһында Рәсәй составына ҡушылғанға тиклем ниндәй ҙә булһа ҡалалар булыуын раҫлау туҙға яҙмаған, хатта фәнгә ҡаршы фекер, тип нарыҡлана. Әммә XVIII-XIX быуаттарҙа йәшәгән Өфө кешеләре, барса нәмәгә туранан-тура ҡарап, ниндәйҙер алдан бирелгән фекерҙе тотмайынса, улай тип иҫәпләмәгән. Өфө ҡалаһының башлығы һәм төбәкте өйрәнеүсе Дмитрий Волков, үҙ күҙәтеүҙәренән сығып, былай тип яҙған: "Нелегко говорить об уфимской старине. Могилы безмолвны, хартии и свитки большею частию истлели, летописей нет, не осталось почти и преданий. Мы видим только на окраинах города немые курганы - памятники давно исчезнувших народностей; остатки рвов - свидетелей давно стихнувшей борьбы; знаем, что вся обширная площадь, на которой так просторно раскинулась теперь Уфа, представляет собой поле, полное костей человеческих: где ни копни, везде скелеты и кости. Это - Божья нива, удобренная человеческими телами, говорит красноречиво, что здесь крепко и долго боролись, страдали и гибли некогда люди".

***Фларит Сөнғәтов:*** Өфө ярымутрауы территорияһында бер нисә тиҫтә археологик ҡомартҡы бар, улар неолит эпохаһынан башлап һуң урта быуаттарға тиклем ваҡыт арауығына ҡарай. Урта быуаттар осоронан ҡалған 5 ҡаласыҡ асылған. Ҡаланың иҫке өлөшөндә 2 ҡомартҡы булһа, Өфө менән Черниковка араһында V-VII быуаттарға ҡараған ҙур Дежнев ҡәберлеге булыуы билдәле. Ул 200-ҙән ашыу ҡурғандан хасил.

***Салауат Хәмиҙуллин:*** Әле иҫкә алынған Өфө-1, Өфө-2, Өфө-3 ҡаласыҡтарынан башҡа Усть-Уфимское тип аталған ҡаласыҡ Өфө йылғаһы тамағы тәңгәлендә, Президент-Отель районында йылғаның бейек морононда урынлашҡан, ә Салауат Юлаев һәйкәле янындағы майҙан территорияһында Өфө-4 ҡаласығы табыла. "Московские ведомости" гәзитенең 1886 йылда сыҡҡан бер һанында ул саҡтағы Өфө интеллигенцияһының ҡаланың рустарға тиклемге осорона ҡарата өҫтөнлөк иткән фекерҙәренә ҡыҫҡаса резюме бирелгән: **"Значение Уфы, как стратегического оплота, было понято и раньше ея прежними обитателями: ногайцами и башкирами, при которых около нынешней Уфы существовал древний город Тура-Тау и военное укрепление "станивище на Чортовом городище" около Бирска".** Бындай ҡараштар башҡорт старшинаһы Ҡыҙрас Муллаҡаевтың Рычковҡа биргән мәғлүмәттәренә нигеҙләнгән: **"...задолго до покорения Российскому скипетру Казанского царства и башкирцев, на самом том месте, где ныне город Уфа, был великий город, который простирался по реке Белой до устья Уфы, и до Уфимских, то есть при реке находящихся гор, так что жительство его распространялось по длине верст на десять".** Һуңынан ҡаланың кешеләрһеҙ ҡалыуы хаҡында урындағы риүәйәтте лә Рычков теркәп ҡуйған: **"...на том Уфимском месте, кое тогда Туратав именовали, оказался великий змей, и приходя в город, многих людей ядом своим заражал и умерщвлял...".**

Әммә башҡорт старшинаһы әлеге бөйөк ҡаланың Туратау тип аталыуы хаҡында түгел, ә әле "Өфө урыны" тип йөрөтөлгән ерҙең генә әүәл Туратау тип аталыуы хаҡында мәғлүмәт бирә, был "ҡәлғә йә иһә ҡала тауы" тигәнде генә белдергән. Рустар Туратауҙы һуңынан "Усольская гора" тип атай, был - хәҙерге Сочи урамынан Софьи Перовская урамына тиклем һуҙылған ҡалҡыулыҡ.

Петр Рычков ошо тау түбәһендә боронғо ҡаласыҡ булыуы хаҡында ла мәғлүмәт бирә: **"...над самою рекою Уфою от города верстах в пяти, на весьма высоком и прекрасном месте видно татарское городище, где, как сказывают, ногайские ханы живали".** Шулай итеп, XVIII быуатта Өфө кешеләре "Иҫке Өфө" ҡалаһының ҡайҙа урынлашыуы хаҡында, улар үҙҙәре уйлауынса, бик белеп һөйләгән кеүек. Уларса, юғалған ҡала Усольская тауында, йәғни, Туратауҙа урынлашҡан булыуы итимал.

***Владимир Агте:*** Ҡала топонимияһында "Иҫке Өфө" атамаһының һаҡланып ҡалыуы үҙе бер йомаҡ кеүек. Быны сағыштырыу өсөн рустарҙың Рязань ҡалаһы атамаһын ҡарайыҡ: хәҙерге Рязандән башҡа Иҫке Рязань исемле археологик ҡомартҡы бар, ә улар бер-береһенән тиҫтәләрсә саҡрым арауыҡта урынлашҡан. Хәҙерге Рязань ҡалаһын 1778 йылға тиклем Переяславль-Рязанский тип йөрөткәндәр. Ни сәбәпле боронғо ҡомартҡы исеме яңы ҡала атамаһы булып китә - быны белеүе мөмкин түгел. Бәлки, Өфө ҡәлғәһен дә бында әүәлерәк булған тораҡ исеме менән атай башлағандарҙыр. Ә Өфөлә барыһы ла Сутолока йылғаһының арғы яғын Иҫке Өфө тип атап йөрөттө, һәм был топоним әлегә тиклем һаҡланып ҡалған.

**(Дауамы. Башы 37-44-се, 46-47-се һандарҙа).**

*ТАРИХЫҢДАН ДАН ТАП!*

# БАШҠОРТ АБЫЗДАРЫ ҺӘМ БАТЫРҘАРЫ

XVIII быуат һуҙымында абыздар батша хөкүмәте тарафынан аяуһыҙ эҙәрлекләнә һәм хөкөм ителә, язалана башлағас, был абызсылыҡ йәмғиәт институты тарҡалған. XIX быуатта инде абыз атамаһы туған-тыумаса араһында оло һәм абруйлыраҡ кешене ололап әйтер төшөнсә кимәленә төшөп ҡалған (абыз ағай, абыз апай, абызый, абыстай һ. б.). Тарихи атамалар, дәрәжә-исемдәр ҙә шулай төрлө дүнештәргә дусар була икән.

* * *

Батыр исеме һәм дәрәжәһе лә ошоға оҡшаш яҙмыш кисерә.

Борон башҡорт һәм башҡа төрки халыҡтарында ла батыр - ил-ырыуҙың данлыҡлы ҡаһарманын, яу батырын аңлатҡан шанлы исем. Улар ил, халыҡ азаматтары булараҡ дан-шөһрәт алған.

Батыр исеме үҙе менән дәрәжәһен, аҫыл заттар иерархияһында үҙ урынын да билдәләшкән. Борон яуҙарҙа еңеп сығыусы батыр икән, уға ниндәйҙер хәрби башлыҡ исемен дә алып килгән, үҙе аҫыл заттар араһына ингән. Яуҙа еңеп, ҙур улъялар (трофейҙар) алып ҡайтһа, байып та киткән. Шулай исеме, дәрәжәһе, вазифаһы, байлығы артҡан.

Шуға күренекле тарихсы А. П. Чулошниковтың башҡорт батырҙарын социаль йәһәттән юғары ҡатламдарға индереүе осраҡлы түгел. Улар араһынан, ғәҙәттә йөҙ башлыҡтары, мең башлыҡтары тәғәйенләнгән. Башҡорт восстаниеларының башында йыш ҡына яугир батырҙар торған. 1681-1684 йылдарҙағы ихтилал башында Сәйет, Һары Мәргән батырҙар, 1704-1711 йылдарҙағыларында арҙаҡлы Алдар батыр Иҫәнгилдин, Күсем батыр Түләкәев, 1735-1740 йылдарҙағында Аҡай батыр Күсемов, Йософ батыр Арыҡовтар тороуы быны асыҡ күрһәтә. Азатлыҡ өсөн көрәш яу майҙандарында тарихҡа батыр исеме менән инеп ҡалған данлы, арҙаҡлы шәхестәрҙе сығарған. Исем-атына батыр исеме халыҡ тарафынан бирелеп, ҡуш булып киткәндәре тарихи документтарҙа ла шул исемдәре менән бергә йөрөй. Ундайҙар үҙҙәре бер шанлы плеяда. XVIII быуаттың тәүге яртыһындағы восстаниеларҙа ҙур урын тотҡан батырҙарҙан тарихи ҡағыҙҙарҙа ла шундай исемдәр йыш телгә алына: Айыҡкол батыр Ямантаев, Айыҡкол батыр Һөйөндөков, Алғушай батыр, Арыҫлан батыр Аҡҡулов, Имән батыр, Ҡарт батыр, Күҫәк батыр, Ҡыҙрас батыр Килдешев, Назарғол батыр, Раҡай батыр, Йомаҡай батыр Ҡужаков һ. б.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ.**
**"Башҡорт халҡының рухи донъяһы" китабынан.**

**(Дауамы. Башы 42-47-се һандарҙа).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



# БАШҠОРТТАР

## Солоҡсолоҡ һәм умартасылыҡ, малсылыҡ һәм ҡошсолоҡ, ер эшкәртеү

Эре малдың ите, йылҡы ите кеүек үк, туҡланыу өсөн ҡулланылған, һөтөнән эремсек эшләнгән, ҡорот һәм май әҙерләнгән. Тиреһенән аяҡ кейеме һәм башҡа әйберҙәр тегелгән.

Ваҡ малдан башҡорттар күпләп һарыҡ аҫыраған. Ҡасандыр ярымкүсмә тормошта йәшәүсе башҡорттар өсөн ат кеүек үк мөһим роль уйнаған һарыҡтарҙы XIX быуат һуңында Башҡортостандың көнсығыш, Урал аръяғы райондарында күпләп тотҡандар. Төрлө төҫтәге, нигеҙҙә, аҡ йөнлө, ҡойроғо ныҡ майлы булмаған, ҡыҫҡа ҡойроҡло, тупаҫыраҡ, еңелсә бөҙрә йөнлө һарыҡтар киң таралған була. Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш өлөшөндә ҡаҙаҡ йәки ҡалмыҡ бөҙрә һарыҡтары осрай. Улар ҙур кәүҙәле, ҙур башлы, һәлбер ҡолаҡлы һәм майлы ҡойроҡло булыуҙары менән айырылып торған. Һарыҡтарҙың йөнө оҙон, йыуан һәм бөҙрә булған. Был һарыҡтар илдең башҡорттар йәшәгән ялан өлөшөндә тибенгә ҡулайлашҡан һәм уларҙы күпләп аҫырағандар. Улар ҡар күп яумаған һәм боҙлауыҡ булмаған ҡыштарҙа аттар менән бергә тибендә йөрөгән.

Ваҡ мөгөҙлө малдың атамаһы, эре малдыҡы кеүек үк, енесе, йәше һәм тыуыу ваҡыты буйынса төрлөсә аталған. Ваҡытында тыуған һарыҡ бәрәсен бәрән (тәкә бәрән, орғасы бәрән) тигәндәр. Йәйгеһен тыуған бәрән - йәйҙәүес (тәкә йәйҙәүес, орғасы йәйҙәүес) бүлтерек тип йөрөтөлгән. Көҙөн тыуған бәрәс - әтәмбәй (тәкә әтәмбәй, орғасы әтәмбәй).

Бәрәстәр кәрәкмәгән ваҡытта тыумаһын өсөн малдарҙы бергә көткән ваҡытта башҡорттар тәкәләргә яҙғы-йәйге осорға махсус туҙ алъяпҡыс - көйәк бәйләгән. Һөҙөмтәлә тәкәләр һарыҡтарҙы аталандыра алмаған.

Тәкәләр имеүҙән туҡтап, ике йәшкә еткәнсе тәкә бәрән тип аталған, имеүҙән туҡтаған һәм икенсе тапҡыр бәрәнләгәнгә тиклемге һарыҡтар - һарыҡ бәрән тип аталған. Ике йәштән өлкән тәкәләр - тәкә, һарыҡ тәкәһе, ә икенсе бәрәнләүҙән өсөнсө бәрәнләүгә тиклемге һарыҡтар - шешәк һарыҡ, аталандырыусы тәкә - ҡушҡар, өсөнсө бәрәнләгәндән һуң үлгәнгә тиклемге һарыҡ - һарыҡ, тоҡомһоҙ ҡалдырылған тәкә - беселгән тәкә, нормаль шарттарҙа ла бәрәнләмәгән һарыҡ - тыуса, үрсем бирмәгән һарыҡ - тыу һарыҡ, ағымдағы йылда бәрәнләмәгән һарыҡ - ҡыҫыр һарыҡ тип атала.

Иттән тыш, һарыҡтың йөнөн алғандар. Уны кейеҙ баҫыуға, кейеҙ тирмә ҡороуға һәм башҡа хужалыҡ кәрәк-ярағы: аяҡ кейеме эшләү (йөн ойоҡ бәйләү һәм итек тегеү), туҡыма эшләү өсөн файҙаланғандар. Һарыҡ тиреһе ҡышҡы кейем тегеү өсөн кәрәкле материал булып торған.

**(Дауамы бар).**

*✓ Минең һуңғы йылдарҙа яҙылған картиналарымда башҡорт тематикаһы киң урын биләй, халыҡ йолаларына, тарихи ҡиммәттәргә, милли ғөрөф-ғәҙәттәргә, мифтарға йыш мөрәжәғәт итәм.*

# РӘССАМ

## быуындарҙы быуындарға

**Рәсәй Федерацияһы рәссамдары һәм Мәскәү рәссамдары союздары ағзаһы, Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы, Шәйхзада Бабич исемендәге дәүләт йәштәр премияһы лауреаты Сулпан БИЛАЛОВА бөгөнгө көндә иң әүҙем эшләгән рәссамдарыбыҙҙың береһе. Бала саҡтан халҡының тарихын белеп, рухи ҡомартҡылары менән танышып үҫкән Сулпандың ижад юлы бай. Бөгөнгө заман темаһы, йә алыҫ тарих йылъяҙмаһы, һәр картина йәнле фекер алышыуға сәбәп була. Бөгөн ул Мәскәүҙә йәшәһә лә, күңеле менән тыуған ғәзиз төйәгендә һәм йөкмәткеле ижады аша беҙгә уны нисек һаҡларға, нисек ҡәҙерләргә өйрәтә. Бында һүҙҙәр кәрәкмәй. Бары Сулпандың картиналарына күҙ һалығыҙ.**

**Сулпан, беҙ һеҙҙе "Аҡбуҙат" журналында эшләгән йылдарҙан яҡшы беләбеҙ. Баҫманың биҙәлеше өсөн тәүге көндәрҙән үк ҙур тырышлыҡ һалдығыҙ. Кескәйҙәргә үҙегеҙҙең тылсымлы һүрәттәрегеҙ аша яҡты, нурлы, сихри донъя бүләк итеүгә өлгәштегеҙ. Ә Сулпан Билалова исемле рәссамға "Аҡбуҙат"та эшләгән йылдар нимә бирҙе икән?**

- Һәр кемдең тормошонда уның артабанғы яҙмышын хәл итә торған боролошло осрашыуҙар була. Бер мәлдә мине лә яҙмышым кескәйҙәр өсөн яңы ғына сыға башлаған журналдың баш мөхәррире, һоҡланғыс шәхес, талантлы шағирә Фәкиһә Туғыҙбаева менән осраштырҙы. Эйе, шунан алып, тәүге һандарынан был баҫманы үҙемдең һүрәттәрем менән биҙәй башланым. Иллюстрациялар тыуҙырыуҙа ул саҡта әллә ни тәжрибәм дә юҡ ине, ләкин мин ышаныстығы аҡларға, һынатмаҫҡа тырыштым. Ижад ғазаптарына ла дусар булдым. Ана шундай мәлдәрҙә Фәкиһә Туғыҙбаева мин яратҡан әйтемде йыш ҡына ҡабатлай торғайны: "Бейеүсе бейей-бейей оҫтара!" Баш мөхәрриребеҙ шағирә булһа ла, иллюстрациялау нескәлектәрен бик яҡшы аңлай ине, ярҙамы ҙур булды, һәр саҡ кәңәштәрен биреп торҙо. Кәңәшләшеп, аңлашып эшләнек. Мин иғтибарлы Фәкиһә Һаҙый ҡыҙын әле лә шуның өсөн оло хөрмәт менән иҫкә алам, уға рәхмәтем һәр саҡ күңел түрендә йәшәй.

Журнал менән ҡуша үҫем дә үҫтем һәм был үҫеш, шөкөр, әле лә дауам итә. Тағы ла шуны өҫтәп әйтергә кәрәктер, "Аҡбуҙат"та эшләгән саҡта мине рәссам булараҡ таный башланылар, уның һөҙөмтәһе - китаптарҙы биҙәргә йыш мөрәжәғәт иттеләр. Башҡортостанда ғына түгел, Мәскәү нәшриәттәрендә сыҡҡан бик күп китаптарҙың иллюстраторы булып киттем.



**Һеҙ хәҙер байтаҡ йылдар Мәскәүҙә йәшәйһегеҙ. Башҡортостандан ситтә йәшәү ижадығыҙға ниндәй үҙгәрештәр индерҙе?**

- Ватанынан ситтә йәшәгән саҡта кешелә һағыныу, һағыш тойғоһо ныҡ көсәйә. Рәссам үҙенең кисерештәренән, хис-тойғоларынан айырылғыһыҙ, улар менән бергә йәшәй, һәм был уның ижадында асыҡ сағылыш таба ла инде. Бына шуға ла минең һуңғы йылдарҙа яҙылған картиналарымда башҡорт тематикаһы киң урын биләй, халыҡ йолаларына, тарихи ҡиммәттәргә, милли ғөрөф-ғәҙәттәргә, мифтарға йыш мөрәжәғәт итәм. Башҡорт эпостары, легендалар ижадымдың һәлмәк өләшән тәшкил итә. Башҡорт халҡының тарихи һәм рухи ҡомартҡыларына үтә лә һаҡсыл мөнәсәбәттәмен, сөнки ул рәссамдан айырым бер яуаплылыҡ талап итә. Рәссамдарҙың ижады, хеҙмәте - быуындарҙы тоташтырып торған эстафета таяғы ул, был таяҡты улар ҡулдан төшөрөргә тейеш түгелдәр.

**Һеҙҙең картиналар аша рухи ҡомартҡыларыбыҙҙың бөйөклөгөн асабыҙ, улар беҙгә үҙебеҙҙе танырға, кемлегебеҙҙе тәрәнерәк аңларға ярҙам итә. Ҡайны бер картиналарығыҙҙың тыуыу тарихы менән таныштырһағыҙ ине. Нимә һеҙҙе илһамландыра?**

- Башҡорт мәҙәниәте, һәр бер боронғо халыҡтың тарихы кеүек үк, художестволы ижад өсөн сикһеҙ ҙур илһам сығанағы булып тора. Мин бәләкәй саҡта Алпамыша батырҙар, ҡаһармандар, һушты алырлыҡ һылыуҙары, тылсымлы толпарҙар, ғәжәйеп ҡоштар тураһында әкиәттәр, легендалар тыңлап үҫтем. Ана шул ваҡыттарҙа уҡ ғәжәйеп сихри сюжеттар һәм образдарҙы минең мейем "рәсемгә төшөрә" ине инде. Ошо әкиәттәр менән ҡуша тыңлаусы геройҙарҙың әхлаҡи-генетик һынланышын күҙ алдына баҫтыра, кешеләрҙең үҙ-ара нисек мөнәсәбәт ҡороуын, ғөмүмән, тормош ҡанундарын да үҙенә һеңдерә һәм халҡының характерын, психологияһын тәрәндән аңлай башлай. Рухи хазиналарыбыҙҙа яҡшылыҡтың яуызлыҡты еңеүе данлана, улар аша сал сәскә, аҡһаҡалға хөрмәт, ҡыйыулыҡҡа, изгелеккә, яҡындарыңа һөйөү, ватанды һаҡлаусыға ихтирам һәм башҡа күп сифаттар тәрбиәләнә. Былар бөтәһе лә тормошто тәрәнерәк аңларға, кешелектең яҡшы һәм насар яҡтары тураһында асыҡ фекер йөрөтөргә ярҙам итә.

Бына "Тауҙарҙы һаҡлаусы" картинаһы. Ул, бер һүҙһеҙ, Урал тауҙарын, бындағы тәбиғәттең гүзәллеген данлай, сөнки күп быуаттар буйы тап ошо ерҙә башҡорт халҡы тарихи һәм мәҙәни йәһәттән формалашҡан, үҫешкән, нығынған. Башҡорт ере тауҙарға бай. Мин картинаны бик боронғо мотивтар менән тулыландырҙым, ул башҡорттарҙың тауға табыныу осорон тасуирлай. Һәр ырыуҙың үҙ тауы булған, уны һаҡлаусы тау эйәһе бар, тигәндәр. Тау итәгендә йыйындар үткәрелгән, туғандар, яҡындар йыйылышҡан, улар шунда көс алған. Берҙәмлектә - көс. Тау башында изгеләр һәм батырҙар мәңгелек төйәк тапҡандар. Был картинала күк Тәңреһе - башҡорт шихандарын һаҡлаусы тип ҡабул ителә.

Тауҙар бит беҙҙе бик-бик боронғо замандарҙан күк менән тоташтырып тора. Ошо бәйләнеште күк Тәңреһе образы аша сағылдырырға кәрәк ине. Башы күккә тейгән бөhлеүән - күк Тәңреһе мөһабәт һында ултыра. Ел уйнатҡан уның иҫке кейеме һәм сал һаҡалы мәңге азат, мәңге ирекле болоттар менән ҡуша үрелгән. Ә болоттар сал Урал менән бер төҫтә. Күк Тәңреһе иһә әкрен генә тәбиғәт эсенә инеп, һеңеп, уның менән бер бөтөнлөктә икәнен аңғарта. Был образдың елдән ҡытыршыланған битен иҫәпһеҙ-хисапһыҙ йыйырсыҡ ҡаплаған, һәр буразна-йыйырсыҡ - уның зо-







***✓ Ҡай саҡ кемдер минең ҡулымды үҙе йөрөтә кеүек тойолоп китә. Ашарға-эсергә онотам. Әйтерһең, ҡулыма кемдер ҡылҡәләмде йәбештереп ҡуйған. Бармаҡтарҙы яҙа алмайым, арҡам ҡатып китә.***



# ХЕҘМӘТЕ...

## тоташтырыусы ул

лом һәм яҡтылыҡ араһындағы ҡаты көрәш шаһиты. Тап шулай булырға тейеш, тип ҡалыпҡа һалмайым. Картинаны ҡараған һәр кем уның йөкмәткеһенә үҙенсә аңлатма бирә ала, сөнки йәшәйештең, фанилыҡтың мәңгелек һорауҙары бихисап, һәм уларға бер төрлө генә яуап биреп тә булмай.

**Сулпан, рәссамға илһам нисек килә? Теге йәки был идеяның тыуыу тарихын белге килә.**

- Идеяны мин Юғарынан төшөрөлгән бер материя тип ҡарайым, сөнки ул миңә яңы сюжет бирә. Әгәр ҙә шундуҡ теркәп ҡалмаһаң, ул көтөп тормай, юҡҡа сыға ла ҡуя. Һуңынан иҫкә төшөрөп маташаһың, миңә ныҡ тәьҫир иткәйне, әле генә хәтеремдә ине лә баһа, тип тә ҡарайһың, юҡ, кире осоп килмәй. Бына шуға ла хәҙер мин үҙем менән сумкамда һәр саҡ бәләкәй генә блокнот һәм ҡәләм йөрөтәм. Юлдамы, башҡа ерҙәме, берәй идея килһә, онотмаҫ өсөн йәһәт кенә теркәп ҡуям. Ул бәләкәй генә һүрәт, хатта берәй һыҙыҡ булыуы мөмкин, барыбер артабан ул ҙур картинаның нигеҙенә ятасаҡ. Ваҡыт булыу менән мин ошо һүрәткә кире әйләнеп ҡайтам һәм яңы деталдәр өҫтәп, ентекләберәк альбом битенә төшөрәм, һәм һүрәт үҙенең тормошо менән йәшәй башлай. Улай ғына ла түгел, артабан ул үҙе үк нимәне үҙгәртергә, нимәне өҫтәргә икәнен күрһәтә: "Картинаңдың үҙәге ошолайыраҡ булырға тейеш, был һыҙыҡтарыңды алып ташла, ошо урынға яңы деталь өҫтә һ.б.". Шулай итеп, яйлап бер мертлыҡ киндерҙә тыуасаҡ картинаңды асыҡ ҡына төҫмөрләй башлайһың. Бәләкәй форматтағы һүрәтте ҙур туҡымаға күсереүҙең ауырлыҡтары бар, күләм ҡай саҡ уның мәғәнәһен үҙгәртә, һин теләгәнсә килеп сыҡмай. Ысын оҫталыҡ йылдар үтеү менән килә. Әле мин 5-6 зарисовка төшөргәнмен икән, быңа быныһы ҙур форматта уңышлы сығасаҡ, был һүрәт альбомда матур булһа ла, ҙурайтҡас, юғалып ҡаласаҡ, төҫһеҙләнәсәк, тип белеп торам.

**Байтаҡ рәссамдар менән әңгәмә ҡорған булды. Ижади процесс яҙыусыныҡы һымаҡ уҡ: бер тема буйынса яҙырға тотонаһың да, һис уйламаған икенсе юҫыҡты һүрәтләй башлайһың. Һеҙ ҙә шулаймы?**

- Эйе, шулай. Идеяны ҙур форматҡа күсергәндән һуң эштең яңы яуаплы баҫҡысы башлана. Ул ысынлап та - ижад осошо. Симпозиумға, берәй сараға саҡырғанда, темалар алдан тәҡдим ителә, әйтәйек, ватанды һаҡлаусылар, әсәләр, кеше хеҙмәтен данлау, уңыш йыйыу тураһында һ.б. Ойоштороусылар раҫлар өсөн буласаҡ композицияның эскизын ебәреүҙе һорайҙар. Бәләкәй форматта эшләп ебәрәһең, раҫлаһалар, шуны ҙур киндергә күсереп эшләү башлана. Минең эшем нисек килеп сыға? Төп эшем эскиздан бөтөнләй айырыла, симпозиумды ойоштороусылар минең холоҡто беләләр, хәҙер инде был үҙгәрешкә иғтибар имәйҙәр. Эш барышында мин ысын мәғәнәһендә ижадсыға әйләнәм. Шуғалыр ҙа ҡай саҡ кемдер минең ҡулымды үҙе йөрөтә кеүек тойолоп китә. Ашарға-эсергә онотам. Әйтерһең, ҡулыма кемдер ҡылҡәләмде йәбештереп ҡуйған. Бармаҡтарҙы яҙа алмайым, арҡам ҡатып киткән. Бына шулай айырыла алмай эшләйем.

Картинаны яҙа башлаған сағымда ҡай берәүҙәр "Бында ниндәй сюжет буласаҡ, ул нисек тамамлана?" тип һорайҙар. "Мин уны яҡынса ғына беләм", тип яуаплайым. Баштағы уй-ниәттәр эш барышында ҡырҡа үҙгәрә лә китә бит. Унан һуң, һинең был ижад емешең тамашасыла хистәр уятырлыҡ булһын, тип тә уйлайһың. Мәҫәлән, минең "Аҡын" картинаһында сәсән ҡобайыр әйтә. Гаджет та, телевизор ҙа элек булмаған, һүҙ сәнғәте бары телдән-телгә күскән. "Урал батыр" ҙа беҙгә шулай килеп еткән. Картинамда һүҙ сәнғәтенең көсөн бирергә кәрәк ине. Ҡобайыр әйткән сәсәндең күҙҙәре йомоҡ, ә йөҙөн сырыш баҫҡан. Һәр бер тәрән йыйырсыҡ уның ауыр тормош юлын, тарихын бәйән итә. Ҡарттың ауыҙы ярым асыҡ һәм был сикһеҙлекте, мәңгелекте сағылдыра. Картина ҙур, сәсән ҡап уртала ултыра, тамашасы яҡын килеп ҡараһа, иң элек уның йөҙөнә иғтибар итә. Тамашасы, гүйә, уның көйләп һөйләгәнен, ҡай берәүҙәр тояҡ тауыштарын, һыу сылтырағанын, ҡоштар һайрауын ишетә....

**Һеҙҙе "Урал батыр" эпосы ла, башҡа халыҡ ижады өлгөләре лә рухландыра икәне асыҡтан-асыҡ аңлашыла...**

- Эйе, халыҡ ижадына йыш мөрәжәғәт итәм, "Урал батыр" булһынмы, башҡа ҡобайырҙармы, һәр береһе рухландыра. Сюжеттары үҙҙәренән-үҙҙәре алегорияға, символдарға әйләнә, ошолай аңлатыу тамашасыға тәьҫир итә, уның хәтерен тергеҙә. Эйе, беҙҙә ҡан хәтере бар һәм халыҡ эпосын картинала ошолай һүрәтләү үҙебеҙҙе тәрәнерәк аңларға ярҙам итә.

Мин илһөйәрлек темаһына ла йыш мөрәжәғәт итәм. Халыҡ рухы һүнмәүен, нығыныуын күрһәтәм. "Ата менән ул" композицияһын тыуҙырыуға ошо маҡсат этәрҙе лә инде. Үҙәк урында мөһабәт атты күрерһегеҙ. Был толпар халыҡ көсөн, тәбиғәт көсөн аңлата. Халыҡ - үҙ тарихының, хәтеренең хакимы, ошо хәтер быуындан-быуынға тапшырыла килһә, тормош дауам итәсәк. "Урал батыр"ҙа шул данлана һәм йәшәү мәғәнәһе тураһында уйланырға саҡыра. Шуға ла алғы планда көслө ҡеүәтле атты эшләү идеяһы тыуҙы. Ат өҫтөндә көслө, үҙенә ышанған, тыныс алпамыша ир ултыра. Ул милли кейемдә, ҡулында - өс-дүрт йәштәрҙәге улы. Атаһы бөтөн мираҫты уға ҡалдырырға, уны батыр булырға өйрәтергә тейеш. Бәләкәй баланан ысын ҡаһарман ул үҫеп сығасаҡ. Атайҙың ҡулында һөңгө, ул да ерҙе һаҡлау символы, уҡ-яны ла бар, тимәк, кеше һәр саҡ уяу, ерен баҫырға килгән дошманды ҡыйратырға әҙер. Бер үк ваҡытта ул мал табыусы, тимәк, ғаиләһен, улын хәстәрләүсе. Сабый ҡулында ағас ҡылыс. Ул әле уйнай ғына, ләкин уйынға ла инде мәғәнә һалынған. Был аллегория малайҙың атаһына лайыҡлы вариҫ икәнен күрһәтә.

Ғаиләне Урал тәбиғәтендә төшөрҙөм. Урал тауҙарынан йылға ағып сыға. Артҡы планда тирмә. Башҡорт һәм ат берлеге һүрәтләнә. Ғөмүмән, башҡорт атһыҙ йәшәй алмаҫ ине. Улар бер бөтөндө хасил иткән. Картинаны яҙған саҡта ҡыҙыл һыҙыҡтар төшөрҙөм, бер ҡараһаң, осҡон һымаҡ, икенсе ҡараһаң, ҡояш нуры, шулай уҡ ҡан төҫө сағыла унда. Байрам төҫө, фажиғә төҫө, күп мәғәнә һалынған.

Мин был темаға бер генә картина яҙырмын, тип уйлағайным, ләкин улай булманы. Йыш ҡына эш мәлендә шул картинаға бәйле миндә яңы сюжеттар тыуа башлай. Улар тәүге картинаны байытырға тейештәр. Киндерҙә, ҡағыҙҙа төшөрөлгән серияларым күп кенә: "Кешеләр һәм балыҡтар", "Кешеләр һәм океан", "Кешеләр һәм һыу", музыкаға, балаларға арналғандары бар. Легендалар һәм мифтар серияһы айырым урын биләй.

Һәм бына "Ата менән ул" картинаһын яҙған саҡта, уның икенсе яртыһын - ҡатын-ҡыҙ булған өлөшөн эшләү теләге уянды. "Ата менән ул" диптихтың уң яғын тәшкил итһә, ҡатын-ҡыҙ - һул яғын. Үҙәк урындағы милли кейемдәге һылыу йәш ҡатын башҡорт биҙәктәре төшөрөлгән келәмде яҙып тотҡан. Уны йәйергә әҙерләйме, әллә әле генә туҡып бөткәнме, әллә ер моңон тыңлап, шулай баҫып торамы, быны тамашасы үҙе фараз итергә тейеш. Ҡыҙыҡай алғы планда ҡумыҙ сиртә. Ер моңон ишетәбеҙ унда. Башҡортта көйҙәр ер моңон хәтерләтә. Сөнки йылға буйында, тәбиғәттә булғанда ҡумыҙҙа мин башҡорт моңон ишеткәндәй булам. Әйтерһең, тәбиғәт үҙе ҡумыҙҙа уйнай.

Гәзит уҡыусыларға шуны әйтәм: ижадымды күҙәтеп барығыҙ, яңы эштәрем менән тамашасыны аптыратырмын әле, тип вәғәҙә бирәм. Картиналарым аша быуындар бәйләнеше нығырға, хәтер ебе өҙөлмәҫкә тейешлеген нығыраҡ аңларһығыҙ. Маҡсаттарығыҙ йөрәгегеҙҙә яңғыраш алһын, һеҙҙе яңы кисерештәр, матур хис-тойғолар, фекерҙәр менән байытһын. Беҙ кем ул, фани донъяға ниңә килгәнбеҙ, киләсәккә үҙебеҙҙән һуң нимә ҡалдырырбыҙ, балаларыбыҙ беҙҙе нисек итеп хәтергә алыр? Быға беҙ ижад һәм хеҙмәт аша, хәтерҙе һаҡлау аша яуап бирә алырбыҙ тип уйлайым.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА
яҙып алды.**





✓ *Элек-электән башҡорттар төйәк иткән Уралтауҙың тәбиғәтенә генә түгел, ҡая-урмандар ипкенлеген, дала-яландар иркенлеген, халҡыбыҙҙың күңел донъяһына ситтән килеп һоҡланыусылар ҙа күп булған.*



УЙЛЫҒА - УЙ

**Был донъя - бесән ҡыуышы, ти халыҡ мәҡәле. Йөкмәткеһенә һалынған мәғәнәһенән күренеүенсә, донъяның фанилығы, ғүмерҙең күҙ йомоп асҡан арауығына тиң ҡыҫҡалығы хаҡында был әйтем. Шуға күрә донъяның халҡыбыҙ тарафынан тораҡтарҙың иң ябайына һәм ваҡытлыһаһына - бесән ҡыуышына тиңләнеүе һис тә ғәжәп түгелдер. Икенсе яҡтан ҡарағанда, көнөҙөно ҡолас киреп бесән сапҡандан һуң хуш еҫле бесән, сәскә еҫтәренә иҫереп, бесән ҡыуышында йоҡламаған кеше генә былдай рәхәтлектең ни икәнен белмәйҙер. Тимәк, был әйтемгә бесән ҡыуышының ябай һәм ваҡытлыса тораҡ булыуынан тыш, тағы ла тәрәнерәк мәғәнә һалынған.**

# БАШҠОРТТАРҘАН ГЕРОДОТЛЫҠ АҢҠЫЙ...

Халҡыбыҙ йырҙарының ҡайһыһын ғына алып ҡарамайыҡ, барыһында ла тиерлек сағылыш таба донъяның сәхрәләге бесән ҡыуышына, тирмә күркәмлегенә тиң хозурлығы, ғүмерҙең һәр төрлө сағыштырыуҙарға тиңһеҙ ҡәҙере, фанилығы. Миҫалға "Юрмый буйы" йырының һүҙҙәрен генә килтерәйек:

*Йыраҡтарҙан ағарып, ай, күренә*
*Башҡорттарҙың тирмә өйҙәре.*
*Йыраҡтарҙан моңайып, ай, ишетелә*
*Башҡорттарҙың тирмә көйҙәре.*
*Аҡ ҡуяндар кеүек ҡуш-ҡуш баҫып,*
*Эҙгенәйҙәр ҡалһын был ерҙә.*
*Һандуғастар булып һайрашайыҡ,*
*Һүҙгенәйҙәр ҡалһын был ерҙә.*

Йә булмаһа, бик һирәк башҡарылған "Шешәнәкәй буйы" йырының һүҙҙәрен иҫкә төшөрәйек:

*Шешәнәкәй буйы ҡыҙыл ҡырсын,*
*Ҡыҙыл ҡырсындарҙы ҡыҙырҙым.*
*Уҙып ҡына барған был ғүмерҙең*
*Алдарына сығып һыҙғырҙым.*
*Бара ғына торғас, ай, ултырҙым,*
*Аяҡтарым талып та барғанға*
*Ултырып та тороп, бер йырланым,*
*Йөрәктәрем янып та барғанға.*

Шундай хозурлыҡҡа шаһит булып, фани ғына ғүмерҙең ааһыҙ үтеүҙәренә сыҙай алмайынса, үҙ ғүмерендең алдарына сығып: "Үтмәй тор, ғүмерем, мин әле ошо хозурлыҡҡа һоҡланып туймаҡым, танһыҡтарым ҡанманы әле!" - тип һыҙғырыу ғына түгел, әллә нимәләр эшләрһең, иларһың, йырларһың, көләрһең, үкенерһең...

Элек-электән башҡорттар төйәк иткән Уралтауҙың тәбиғәтенә генә түгел, ҡая-урмандары ипкенлегендә, дала-яландар иркенлегендә ике ҡитғаны бер итеп азат тормош менән йәшәүсе халҡыбыҙҙың күңел донъяһына ситтән килеп һоҡланыусылар ҙа күп булған. Шундай шәхестәрҙең береһе мәшһүр (бөйөк түгел, Аллаһ ҡына бөйөк) урыҫ яҙыусыһы, данлыҡлы аҡыл эйәһе Лев Николаевич Толстой булған. Яҙыусы ижадының, улай ғына ла түгел, күңел биографияһының ҙур өлөшө башҡорттар менән бәйле.

"Башҡорттарҙан Геродот еҫе аңҡый" тигән Лев Толстой. Ошо һүҙҙәрҙе яҙғанда ниндәй уй-тойғолар солғанышында йәшәгән һуң яҙыусы? Дөрөҫөрәге, уны тәүге тапҡыр башҡорттар йәшәгән Һамар губернаһының Кәрәлек буйына килергә нимә мәжбүр иткән? Яҙыусының тәржемәи хәле хаҡындағы төрлө сығанаҡтарҙа шул асыҡлана. Толстой ағаһы үлгәндән һуң 1862 йылдың 14 майында хеҙмәтсеһе Алексей Орехов һәм Ясная Полянаһағы ике шәкерте Егорь Чернов, Василий Морозов менән Һамар губернаһының Кәрәлек буйы башҡорттарына ҡымыҙ эсергә килә һәм унда 31 июлгә тиклем була. Йәғни, яҙыусының башҡорттар араһына килеүе ағаһы үлгәндән һуң ҡаҡшаған һаулығын нығытыу маҡсатында ҡымыҙ эсеүгә, дала һауаһы һулауға ғына ҡайтып ҡалған кеүек.

Хәҙер инде Лев Толстойҙың ниндәй кисерештәр, уй-тойғолар шауҡымында Кәрәлек буйына килеүен яҙыусының шул осорға бәйле яҙмаларына таянып асыҡлап ҡарайыҡ. Бынын өсөн уның "Тәүбә итеү" ("Исповедь") тип аталған уйланыуҙарына туҡталып, уның шул осор кисерештәрен күҙ алдына килтерәйек. Яҙмала ниндәй уйланыуҙар шауҡымы уны башҡорттар араһына килтереүе аныҡ әйтелә. Әҫәрҙең күләме бик ҙур, шуға күрә мин



яҙыусының ундағы ҡайһы бер фекерҙәренә генә туҡталам:

"...элекке кеүек, хәҙер ҙә православие динен таныусылар һәм ғибәҙәт ҡылыусылар араһында тупаҫ, рәхимһеҙ һәм әхлаҡһыҙ һәм үҙҙәрен бик мөһим һанағандар күберәк осрай. Ә үҙҙәрен динһеҙ тип һанаусылар араһында рәхимле аңлылар, намыҫлылар, эскерһеҙҙәр һәм изге күңелләр күберәк..."

"...ул йылдарҙы (рус армияһы сафында хеҙмәт иткән йылдарын күҙ уңында тота - Ә.Ғ.-Ү.) ҡотом осоп, ерәнеп һәм йөрәгем һыҙлап иҫкә төшөрәм. Мин кешеләрҙе һуғышта, дуэлгә саҡырып үлтерҙем, кәрттә отолоп та уларҙың йөнен ҡыйҙым, мужиктарҙың елкәһендә көн күрҙем, үҙҙәрен үлтерҙем, фәхишәлек ҡылдым, алдаштым. Ялғанлыҡ, урлыҡ, аҙғынлыҡтың ниндәй генәһен ҡылманым, эскелек, көсләү, үлтереү... Мин ҡылмаған енәйәт тә ҡалмағандыр һәм быны өсөн мине һәр ваҡыт маҡтанылар, тиҫтерҙәрем мине сағыштырмаса әхлаҡлы кешегә һананы. Ун йыл ғүмерем шулай үтте..."

"...тормошом туҡтап ҡалды. Мин һулыш алам, ашайым, эсәм, йоҡлайым, сөнки һулыш алмайынса, ашамайынса, эсмәйенсә, йоҡламайынса булдыра алмайым: әммә минең өсөн тормош юҡ, сөнки тормошҡа ашырылыҡ теләктәремде мөһим тип һанамайым..."

"...мин, нисектер, йәшәй-йәшәй, алға бара-бара упҡын ситенә килеп баҫтым һәм алдымда үлемдән башҡа нәмәне күрмәйем. Туҡтарға ла ярамай, артҡа ла китеп булмай, алдымда ялғандан башҡа бер нәмә лә булмағанын күрмәҫ өсөн күҙҙе йоморға ла ярамай, алдымда хатта бәхет тә, ысын ғазап та, ысын үлем дә юҡ..."

"...ошо ҡотһоҙлоҡтан ҡотолор өсөн мин үҙемде үлтерергә теләйем. Үҙемде нисек үлтерергә үҙ алдыма килтерәм дә, быны үҙемдең әлеге хәлемдән дә ҡот осҡосораҡ икәнлеген аңлап, туҡталып ҡалам, әммә үҙ үлемем менән үлерергә көтөргә сабырлығым етмәҫен тоям. Йөрәгем йә башҡа ағзам шартлағандан һуң барыһы ла тамамланыры хаҡындағы уй йөрөтөүем нисек кенә ышандырырлыҡ булмаһын, мин барыбер үҙ үлемем менән донъянан китеремде сабыр ғына көтөп ала алмаҫмын кеүек. Үлем ҡараңғылығынан ҡурҡыу миндә шул тиклем көслө, шуға күрә бау йәки пуля ярҙамында унан тиҙерәк-тиҙерәк ҡотолғом килә. Ошо тойғо мине үҙ-үҙемә ҡул һалырға нығыраҡ этәрә..."

"...йыл һуҙымында мәктәп һәм журнал араһын тоташтырыусы булып эшләнем һәм был эшемдән бик яфаландым. Ни өсөн тигәндә, икеһенең араһында бәрелә-һуғыла буталып бөттөм: мәктәптәге эшмәкәрлегем күңел тыныслығымды юйһа, журналдағы урыҡ-һурыҡлыҡтан үҙемдең дә ҡоҫҡом килде. Барыһын да нимәләр өйрәтергә теләү һәм үҙем белмәгәнде уҡытырға теләүемде йәшерергә тырышыу тәнемде генә түгел, йәнемде лә сиргә һабыштырҙы һәм барыһын да ҡүтәреп һуҡтым да, саф һауа һуларға, ҡымыҙ эсергә һәм тәбиғи тормош менән йәшәргә далаға - башҡорттарға юлландым..."

Толстойҙың Кәрәлек буйына ошо барғанында хеҙмәтсеһе һәм ике шәкерте менән нимәләр эшләгәне, башҡорттар менән нисек аралашыуы хаҡында бик күп сығанаҡтарҙа бәйән ителә. Хәҙер инде күҙҙе Толстойҙың үҙенә биреп, "Тәүбә итеү" яҙмаһына күҙ һалайыҡ:

"...унан (башҡорттар араһынан - Ә.Ғ.-Ү.) әйләнеп ҡайтҡандан һуң, өйләндем. Бәхетле ғаилә тормошоноң яңы шарттары мине һәр төрлө йәшәү мәғәнәһе эҙләүҙән бөтөнләй ситләштерҙе. Ул ваҡытта мин бар тырышлығымды ғаиләмә, ҡатыныма, балаларыма һәм йәшәү сығанағын арттырыуға бағышланым. Камиллашыуға ынтылыуым хәҙер инде, ғөмүмән, прогреҫҡа табан камиллашыуға ынтылыуҙан ғәйре ғаиләмдә үҙемде яҡшыраҡ тойоуға ынтылыу менән алмашынды. Ошо шарттарҙа тағы ла ун биш йыл ғүмерем үтеп китте..."

Хәҙер инде Лев Толстойҙың башҡорттарға барған саҡтағы кәйефе менән ҡайтҡан саҡтағыһы араһындағы айырмаға иғтибар итегеҙ. Дөрөҫ уйлайһығыҙ: башҡорттар араһында булыу Лев Толстойҙы үҙ-үҙенә ҡул һалыуҙан аралап ҡалған.

Эйе, эйе, үҙ-үҙенә ҡул һалыу сигенә барып еткән Лев Толстойҙы башҡорттар араһында булыуы ваҡытһыҙ үлемдән араләған. Кемдер өсөн был фекер хәҙерге көн күҙлегенән сәйер ҙә яңғырай торғандыр, әммә яҙыусының "Тәүбә итеү" әҫәре һәм күп һандағы көндәлек яҙмалары, төрлө шәхестәр менән хатлашыуҙары быны бермә-бер раҫлай.

Әлбиттә, яҙыусы үҙенең бер яҙмаһында ла "Башҡорттар мине үҙ-үҙемә ҡул һалыуҙан ҡотҡарҙы, улар араһында булып ҡайтҡандан һуң, тормошҡа мөнәсәбәтем ҡырҡа үҙгәрҙе", тип белдермәй, әммә уның башҡорттар араһында булғандан һуң артабанғы тормош ағышының ыңғай яҡҡа үҙгәреүе юҡтан ғына килмәй. Алда әйткәнебеҙсә, Лев Толстой башҡорттар араһында булғандан һуң үҙ-үҙенә ҡул һалыу ниәтенә тиклем алып барып еткергән күңел төшөнкөлөгөнән ҡотола, дөрөҫөрәге, тормошҡа кире ҡайта. Уға башҡорттар араһына барырға буласаҡ ҡайныһы, кәләше Софьяның атаһы доктор Андрей Берс кәңәш итә. Башҡорттар араһына китер алдынан яҙыусы дуҫтарына, таныштарына шундай һүҙҙәр әйтә: "Унда минә бер ниндәй гәзит тә, хат та килмәйәсәк, мин хатта унда китаптың нимә икәнен дә онотасаҡмын. Салҡан ятып ҡорһағымды ҡояшҡа ҡыҙҙырып, ҡымыҙ эсәсәкмен һәм һарыҡ ите ашаясаҡмын! Шул сағында үҙем дә һарыҡҡа әүереләсәкмен һәм шуның менән һауығасаҡмын..."

Шулай итеп, ике ай ярым самаһы Кәрәлек буйында ял итеп ҡайтҡандан һуң Толстой "Тәүбә итеү" әҫәрендә яҙылған ул саҡтағы Рәсәй ысынбарлығына бәйле ауыр һәм күңелһеҙ уйҙарынан арынып, үҙенә башҡорттар араһына барырға кәңәш биреүсе доктор Андрей Берстың ҡыҙы Софьяға өйләнә һәм башы-аяғы менән ғаилә мәшәҡәттәренә сума, бар донъяға битараф элекке батша армияһы һалдатынан өлгөлө ғаилә башлығына әүерелә. Был ут уға ун биш йылға етә.

1871 йылда яҙыусы Кәрәлек буйына икенсегә килә һәм тағы ла ике ай самаһы башҡорттар араһында йәшәй. "Бында килгәнгә тиклем мине нимәләр борсоһа, хафаларым һәм бар нәмәгә битараф булыуым юҡҡа сыҡты, үҙемде скифтар һымаҡ тоям, миңә бында барыһы ла ҡыҙыҡ һәм яңы... Күп нәмә ҡыҙыҡ һәм яңы," Геродот еҫе аңҡыған башҡорттар ҙа..." тип хат яҙа ул ҡатыны Софья Андреевнаға. Уның "барыһы ла юҡҡа сыҡты" тип атаған кәйеф торошон беҙ, башта әйткәнебеҙсә, Толстойҙың "Тәүбә итеү" әҫәренән уҡып беләбеҙ ҙә инде.

Толстой Кәрәлек буйынан Александр Фетка ла хат яҙа. Һәр бер тәржемә, һәр бер сағыштырыу аҡһай, тигәндәй, яҙыусының кәйефен үҙ асылында аңлар өсөн шағиргә хатынан өҙөктә төп нөхсәһендә килтерәйек: "Здесь очень хорошо и значительно все... Если бы начать описывать, то я исписал бы сто листов, описывая здешний край и мои занятия. Край здесь прекрасный, по своему возрасту только что выходящий из девственности, по богатству, здоровью и в особенности по простоте и не испорченности народа..."

Әлбиттә, был һүҙҙәр яҙыусы тарафынан башҡорттарға ярарға тырышыуҙан сығып әйтелмәгән, етмәһә, Толстой башҡорттар хаҡындағы ошондай фекерҙәрҙе кемгәләр ҡасандыр яҙған хаттарында әйткән саҡта уларҙың бер көн килеп йәмәғәтселек иғтибарына йәлеп ителере хаҡында ла уйламағандыр. Тимәк, ул ни уйлаһа, шуны яҙған. Был - беренсенән, икенсенән, тотош халыҡ тураһында шундайын Геродот һынлы Геродотҡа тиңләрлек фекерҙәрҙе әйтеү өсөн дә ниндәй оло яуаплылыҡ һәм фиҙакәр ҡүҙәтеүсәнлек кәрәк. Әлбиттә, яҙыусы беҙҙең эраға тиклем 400-500-се йылдарҙа йәшәүсе боронғо грек тарихсыһы Геродотты иҫкә алып, иң беренсе нәүбәттә башҡорттарҙың боронғо һәм, тарихсының грек-фарсы һуғыштарын сағылдырған киң билдәле "Тарихтар" тип аталған әҫәрендә сағылғанса, яугир халыҡ икәнлеген әйтергә теләгәне көн кеүек асыҡ. Тимәк, башҡорттарҙың тарихын өйрәнгән Толстой улар хаҡында Геродот осоронан бәйле мәғлүмәттәргә лә эйә булған, тип әйтергә лә тулы нигеҙ бар бында.

*✓ Толстойҙың көндәлектәрендә, хаттарында башҡорттар тормошо хаҡындағы күп һандағы күҙәтеүҙәре теркәлеп ҡалған. Уларҙың барыһында ла яҙыусы был халыҡтың хәйләһеҙ тәбиғәт балаһы булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала.*



1862 йылдан алып егерме йыл һуҙымында яҙыусы башҡорттар араһында барлығы ун тапҡыр була һәм уның көндәлектәренән, дуҫтарына, туғандарына һәм ҡәләмдәштәренә яҙған хаттарынан сығып фекер йөрөткәндә, Толстойҙың ошо йылдар эсендә башҡорттар тормошон төплө итеп өйрәнеүе күренә. Күп кенә сығанаҡтар буйынса, яҙыусының Кәрәлек буйҙары, Ырымбур ере, башҡорттар һәм уларҙың еренә күсеп килеүселәр хаҡында роман яҙырға йөрөгәне билдәле. Яҙыусының төрлө сығанаҡтарҙа сағылыш тапҡан тәржемәи хәленә таянып, ҙур күләмле был әҫәрҙең яҙылмай ҡалыуына ике төрлө сәбәпте нигеҙ итеп килтерергә булалыр:

- беренсеһе, 1880 йылда яҙыусының үҙе яҙған барлыҡ әҫәрҙәренән баш тартыуы;
- икенсеһе, 1990 йылда Николай Икенсенең ҡушыуы буйынса Рәсәйҙең барлыҡ сиркәүҙәре юғары учреждениеһы - Святейший Синод тарафынан Толстойҙың сиркәүҙән ситләтелеүе.

Ә инде яҙыусының киң билдәле "Һуғыш һәм солох" романына килгәндә, Толстой уны 1863-1869 йылдарҙа, йәғни башҡорттар менән тығыҙ аралашҡан саҡта ижад итә. Тарихта теләкшарт һөйкәлеше булмай, тиҙәр, шулай ҙа яҙыуҙан ғына түгел, гөмүмән, йәшәүҙән төңөлгән яҙыусының 1862 йылда Кәрәлек буйы башҡорттары араһында булып ҡайтҡанынан һуң бер йыл үткәс шундайын эпохаль әҫәргә тотона алыуы ла күп нәмә тураһында һөйләй бит. Кем белә, бәлки, яҙыусыға был романын яҙа башлар өсөн, үҙе әйтмешләй, "Геродот еҫе аңҡыған башҡорттар" сәбәпсе булғандыр?

Икенсенән, һәр яҙыусы әҫәрҙәренең төп геройҙарына үҙенең уй-кисерештәрен һала, тигән логиканан сығып ҡарағанда, кенәз Андрей Болконский йөҙөндә беҙ "Тәүбә итеү" әҫәрендәге Лев Толстойҙы ла танайбыҙ. Болконскийҙың да, Толстойҙың да йәш саҡтары батша армияһында хеҙмәттә үтә, улар икеһе лә үҙенең йәшәү маҡсатын - "Тулонын" ватанға хеҙмәт итеүҙә һәм шул юлда дан ҡаҙаныуҙа күрә. Андрей Болконский Аустерлиц яланында ауыр яраланып ятып ҡала һәм аҙаҡтан япраҡтарын ҡойоп, ботаҡтарын йәмһеҙ тарбайтҡан ҡарт имәндә үҙен таныны һәм йәшәүенең мәғәнәһеҙлеген аңлай. Ә Толстой иһә, "Тәүбә итеү" әҫәрендә яҙғанынса, йәшәүҙән төңөлөп, үҙ-үҙенә ҡул һалыу сигенә барып етә. Әммә күңел ҡайтыуҙары, донъянан төңөлеүҙәр ваҡытлыса ғына икән, донъяла бәндәне һәр төрлө һәләкәттән ҡотҡарыр оло мөхәббәт бар. Андрей Болконский Наташа Ростоваға, Лев Толстой Софья Берстка өйләнә. Андрей Болконский яҙын шаулап япраҡ ярған ҡарт имәнгә, Лев Толстой Геродот еҫе аңҡыған башҡорттарға ҡарап күңел балҡыуы кисерә. Был осраҡлы ғына тап килеү түгел, әлбиттә.

Толстойҙың көндәлектәрендә, хаттарында башҡорттар тормошо хаҡындағы күп һандағы күҙәтеүҙәре теркәлеп ҡалған. Уларҙың барыһында ла яҙыусы был халыҡтың хәйләһеҙ тәбиғәт балаһы булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала, халыҡтың аҙға ғына риза булып, үҙ нәфсеһен тыйып йәшәй белеүенә һоҡлана һәм шул арҡала ситтән килеүселәргә арзан ғына хаҡҡа ерҙәрен һатыуына көйөнә. "Кешегә күпме ер кәрәк?", "Ильяс" хикәйәләрендә сағыла уның быны һоҡланыуҙары һәм көйөнөүҙәре. Нимә генә булмаһын, "Был донъя - бесән ҡыуышы" тип йәшәгән, Геродот еҫе аңҡыған башҡорттар XIX быуат аҙағы әйәһенен тормошонда ниндәй роль уйнауы хаҡында һөйләй был дәлилдәр.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*БАЛАҢА УҠЫ!*

# МӘРХӘМӘТЛЕ ҠУЯН



Матур ғына йәшел урманда йәшәгән, ти бер ҡуян. Ул шул хәтлем шәфҡәтле, рәхимле, мәрхәмәтле һәм изге күңелле була. Уны бөтә урман әһелдәре белә һәм яраталар, сөнки ул барыһына ла һәр саҡ изгелек эшләй торған булған...

...Һалҡын ғына күкһел томан таралып та өлгөрмәгән бер иртәлә, ҡуян үҙенең йәшерен урында эшләнгән ояһынан сыға. Һелкенеп ала, тәпәйҙәре менән моронон таҙарта, һоро йөндәрен һыйпап тигеҙләй ҙә, ашыҡмай ғына урман төпкөлөнә инеп юғала. Бәлки, бөгөн дә кемгәлер уның ярҙамы кәрәк булыр, тип уйлай ул.

Бәлә аяҡ аҫтында, тигәндәй, аңғармаҫтан ҡуян сәнскеле шайтан таяғы үләненә баҫа. Үләндең сәнкеле энәләре уның табанына аяуһыҙ ҡаҙалғас, меҫкен ҡуян һыҙланыуынан түҙмәй ҡысҡырып ебәрә һәм арҡаһына ауып тәгәрәп китә. Һыҙланыуҙары бер аҙ баҫылғас, сәнскеләрҙән арынырға теләп, тәпәйҙәрен һелкә, улай ҙа булмағас, һурып сығарырға ла маташа. Ләкин нисек кенә тырышмаһын, сәнскеләр ҡаҙалған урындарында ҡалып, тағы ла нығыраҡ һыҙландыра.

Табандары яраланыу арҡаһында ҡыбырларға ла мөмкинге булмаған ҡуян, башҡаларҙан ярҙам өмөт итеп, бик күп ваҡыт көтөп ултыра. Өмөтө өҙөлә тигәндә генә яҡындағы ҡыуаҡлыҡтар шаулап һелкенә башлай һәм көрән-һоро айыу күренә. Ҡуян шул тиклем шатлана, уға былай ти:

- Әссәләмәғәләйкүм, айыу туған! Табандарыма сәнскеләр инде, шуны һурып алырға, зинһар өсөн, ярҙам итеп ебәрегеҙ әле! Урыныман да ҡуҙғала алмайым... Түҙер хәлем дә ҡалманы...

Айыу ҡурай еләге ашарға бик ашыҡҡан була. Уны тәмле, баллы ҡурай еләге көткәндә, башҡа нәмәләргә иғтибар бүлергә теләге булмай шул айыуҙың. Шуға ҡуянға асыулы ҡарап мығырҙана:

- Эйе шул! Һинең менән генә булашырға ҡалғайны, минең башҡа эштәрем юҡ тип уйлайһыңмы?

Ул хатта туҡтап та тормай, үҙ юлын артабан дауам итә.

Башҡалар көнөнә ҡалып, ярҙамһыҙ хәлдә, ҡуян көн үткәрә. Кис етә. Төн ауыша... Тәпәйҙәренең һыҙлауы, төнгө урмандың төрлө ҡурҡыныс ауаздары уға йоҡларға ирек бирмәй. Сөнки ул йыртҡыстарға еңел табыш булыр ине. Төнөн баш осонда ҙур ҡанаттарҙың ауыр итеп һуғыуы, йә үлән араһында ҡыштырлауҙар, йә йыртҡыс ҡош һәм йәнлектәрҙең ҡотто осороп ҡысҡырыуҙары - барыһы ла уны шомландыра, хафаға һала. Шулай ҙа ул тыныс һәм түҙемле булырға тырыша. Сөнки, кем түҙә, шуға ҡасандыр ярҙам килерен белә ҡуян. Бына таң да ата башлай. Һәм...ниндәй мөғжизә! Яҡындағы ҡайын ағасына ем эҙләп осоп барған ҡарға килеп ҡуна. Ҡуян уны саҡыра:

- Ҡарға апай! Бер яҡшылыҡ эшлә әле! Ярҙам ғына итеп ебәр әле миңә! Тәпәйҙәремдәге сәнскеләрҙе һурып ҡына сығар әле, зинһар өсөн!

- Кем унда? - тауыш сыҡҡан тарафҡа ҡарға иғтибарлы ҡарашын төбәй. - Ҡуян туған, әллә һин инде? Ысынлап та һин шул! Ҡарр! Шундай ҙур бәләгә тарығанһың икән! Тәпәйҙәреңдә ниндәй оҙон сәнскеләр тырпайып тора! Ҡуян туған, һин минең оянан ҡолап төшкән ҡошсоғома нисек ярҙам иткәнеңде онотманым! Әлбиттә, ярҙам итәм, хәҙер итәм!

Ҡарға ергә осоп килеп төшә лә, ҡуяндың табандарынан энәләй осло сәнскеләрҙе суҡышы менән һурып та ала. Ҡуян ҡарғаға ҙур рәхмәттәрен әйтеп, аҡһай - аҡһай, үҙ өңөнә ҡайтып ауа.

Бер нисә көн үткәс, уның яралары төҙәлә, хатта яра урындарының эҙе лә ҡалмай. Кемгәлер ярҙам кәрәкмәйме икән, тип борсолоп, ул тағы урманды ҡыҙырырға сыға. Ҡапыл таныш булмаған сит ең уны һағайырға мәжбүр итә. Ҡуян йән-яғына ҡарана һәм ҡуйы ҡыуаҡтар араһына йәшенгән һунарсыны күреп ҡала. Һунарсы бар донъяһын онотоп, тәмле ҡурай еләген ашап ләззәтләнгән айыуға мылтығын тоҫҡап маташа. Айыу эргәләндәге хәүефте хатта һиҙмәй ҙә, еләк ашауын дауам итә. Был тайыштабан ҡуянға ярҙам кәрәккән мәлдә, эргәһенән туҡтамай ҙа үтеп киткән айыу була. Үтә лә рәхимле холоҡло ҡуян айыуға булған үпкәһен иҫенә төшөрөп тә, күп уйланып та тормай. Эргәһендәге аҡланға һикереп сыға ла, һунарсының күҙ алдында түңгәктәрҙе урай-урай йүгерергә тотона. Һунарсы айыуға атырғамы, әллә ҡуянғамы, тип ҡаушап ҡалып ҡалған арала, ҡуян айыуға: "Ҡас, тиҙерәк", - тип ҡысҡыра ла, үҙе шыршы артына һикерә. Йомғаҡ булып бөгәрләнеп тәрән булмаған йырынға тәгәрәй һәм юҡ була. Айыу ҡыуаҡтарҙы тапап һындыра - һындыра, эре аҙымдар менән йүгереп, урман шырлығына инеп юғала. Һунарсы ауыҙын асып, аптырап, бер нәмәһеҙ тороп ҡала.

Был ваҡиғанан һуң бер нисә көн үткәс, айыу ҡуянды эҙләп килеп таба һәм ҡотҡарғыны өсөн ысын күңелдән уға рәхмәттәрен белдерә. Рәхмәт йөҙөнән ҡуянға бер тырыз тәмле ҡурай еләге бирә һәм: "Ҡуян туған! Теге ваҡыт һиңә ярҙам ҡулын һуҙмағаным өсөн миңә шул хәтлем оят. Ә мин бәләгә юлыҡҡанда һин хатта был турала иҫләп тә торманың, ярҙамға ташландың! Мин хәҙер һәр ваҡыт изге эштәр генә эшләргә, башҡаларға ярҙам ҡулы һуҙырға, ә яуызлыкты йөрәктә алып йөрөмәҫкә, кисерә лә белергә кәрәклеген аңланым!" - ти.

Шулай итеп, ҡуян менән айыу бергәләп тик яҡшы ғәмәлдәр генә ҡылырға һүҙ ҡуйышып, йылмайышып, бер-береһенең ҡулдарын ҡыҫалар.

"Яҡшылыҡҡа өндәгән - яҡшылыҡ эшләгән менән бер", тиелә бит хәҙистә лә.

*СЕТЕРЕКЛЕ ҺОРАУ*

# ҮҘ-ҮҘЕҢДЕ ҮҘГӘРТЕҮ ЕҢЕЛМЕ?



**Гәзиттең 42-се һанында баҫылғайны "Үҙ-үҙеңде үҙгәртеү еңелме?" тигән һорауға яуап. Мин дә шул һорау буйынса фекерләп ҡарайым әле.**

Был һорауға яуап һин үткән ғүмер юлының иҫкен бороломтарында йәшеренгәндер. Урын һәм ваҡыт талап иткән ҡайны бер, хатта иҫкен үҙгәрештәрҙе лә беҙ хәҙерге тәжрибә күҙаллауынан тәбиғи йә тәбиғи түгел тип күрә алабыҙ. Ләкин ен бирелде микән мәлендә шул үҙгәрештәр?

Кеше үҙе үҙгәрмәйенсә, Аллаһ уның хәлен үҙгәртмәй, быныһы һис шикһеҙ! Сөнки бот күтәреп ятҡан әҙәм балаһының ыңғай үҙгәрештәргә өлгәшеүе шикләндерә. Шулай уҡ, әгәр Аллаһ Тәғәләнән һине ниндәй ҙә булһа өлкәлә үҙгәртеүен һораһаң, Ул иҫ киткес тә, көтөлмәгән дә, ғәжәп тә ваҡиғаларҙы башыңдан үткәрәсәк, сөнки үҙгәреш теләге ысын күңелдән тыуған икән, тимәк, уға табан ниндәйҙер, ябай булһа ла, хәрәкәт башҡарыла. Атлауҙа ла бәрәкәт табылыр, уны күрә белһәң, үҙгәрештәрҙе лә эйәртер. Әммә Ул әҙерҙе бирмәй, алдыңа бурыстар ҡуя, ә шул бурыстарҙы хәл итер өсөн үҙгәрергә кәрәк.

Шуны аңлау шуға ла бик мөһим: бурыстарҙы үтәү юлында үҙеңде генә ҡайғыртып, ыҙалар кисереүеңә зарландыңмы, әллә көсөңдө йәлләмәй, бер кемдән үҙеңде йәлләтмәй, тир түгеп, мәсьәлә йоҙағын емереү менән булдыңмы?

Ләкин беҙҙең үҙгәреү үҙ ҡулыбыҙҙа микән? Яҙмыш ҡушыуы буйынса үҙгәрмәйбеҙме ни беҙ? Көҙ аҙағына ағас үҙе теләп яланғас ҡаламы? Ямғыр тамсылары үҙ ирке менән ҡар бөртөктәренә әүерелеп төшәме?

Үҙгәреүҙәр артынан ҡыуыуға бер генә ҡағиҙәне иҫтә тотоу мөһимдер: һиңә тәғәйенләнгәндәр һине һис ураһ үтә алмаҫ, һәм һине ураһ үткәндәр иһә һиңә тәғәйенләнгән булмаҫ.

**Рәзил ШӘМСЕТДИНОВ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ҺАЛҠЫНДАР...

## йөрәк сирен көсәйтә

■ Ғалимдар еңел генә ябығыу юлын уйлап тапҡан. Хәҙер әллә ниндәй күнегеүҙәр эшләп организмды йҙалатыу ҙа, диеталарҙа ултырыу ҙа кәрәкмәй. Май күҙәнәктәрен эстән генетик яҡтан үҙгәртеп, хатта йоҡлағанда ла ябығып буласаҡ, ти Массачусети технология институты ғалимдары. Тикшеренеүҙәр лаборатор сыҫҡандарҙа үткәрелгән. Май күҙәнәктәренең генын үҙгәртеп, ғалимдар метаболизмды тиҙәйтә алған, һөҙөмтәлә артыҡ майҙар үҙенән-үҙе янып бөткән. Тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһе буйынса, сыҫҡандар ашауҙы сикләмәй генә үҙ ауырлығының яртыһын юғалтҡан. Тән ауырлығына физик әүҙемлектең булыуы йәки булмауы ла йоғонто яһамаған. Сыҫҡандар көнө-төнө ябыҡҡан, сөнки уларҙың метаболизмы энергия йыйыу режимынан уны таратыуға күскән. Ғалимдар билдәләүенсә, был процесс кешеләрҙә лә шулай уҡ уңыш менән барасаҡ. "HealthDay" мәғлүмәттәре буйынса, әлеге мәлдә донъяла һимереү менән 500 миллиондан ашыу кеше яфалана.

■ Тестостерон һәм кортизол гормондары артыҡ күп булһа, кеше үҙе лә һиҙмәҫтән алдаша башлай. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашҡан 117 кеше математик тест эшләп, уны үҙ-аллы тикшереп, һөҙөмтәһен ғалимдарға еткерергә тейеш булған. Дөрөҫ сиселгән мәсьәләләр аҡсалата бүләк менән билдәләнгән. Ғалимдар кешенең гормональ фоны менән алдашыуға һәләте булыуы араһында бәйләнеш булыуы йәки булмауы тураһында белергә теләп, анализдар ҙа алған. Аҙаҡтан асыҡланыуынса, кемдәр үҙенең уңышын артырып әйткән, уларҙа кортизол менән тестостерон кимәле юғарыраҡ булған. Ғалимдар раҫлауынса, кортизол стресс хәлдәрендә күберәк бүленеп сыға, йәғни кеше алдаша, һөҙөмтәлә стресс кисерә һәм уның кортизол кимәле лә күтәрелә. Ә тестостерон, киреһенсә, ҡурҡыу тойғоһон баҫа, йәғни кеше яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшеү өсөн алдашыуға бара һәм бының өсөн уға бер ниндәй ҙә яза булмаясағына ышана. Быға тиклем окситоцин - "мөхәббәт гормоны" тураһында асыштар булғайны. Бәктиһән, алкоголь организмға окситоцин кеүек йоғонто яһай икән, шуға ла алкоголле эсемлектәрҙе һөйөүгә мохтаж булыусылар күберәк ҡуллана, тип раҫларға ла мөмкин.

■ Һауа температураһының 10 градусҡа түбәнәйеүе инфаркт ҡорбаны булыу хәүефен 7 процентҡа күтәрә. Кардиологтарҙың януарҡ үткән "ESC Congress 2015" сараһында ғалимдар ошо турала хәбәр итте. Белгестәр алты йыл дауамында Канаданың Виннипег ҡалаһында йәшәүсе кешеләрҙә миокард инфарктын ни сәбәптән барлыҡҡа килеүен асыҡлаған. Йәйгеһен был ҡалала көндәр ҡоро һәм эҫе тора, ҡышын ныҡ һыуыҡ була. Һалҡын ваҡытта миокард инфаркты йышыраҡ булған. Шуға ла кем йөрәк сирҙәре менән ауырый, һауа температураһы ҡапыл һыуытҡан мәлдә үҙ организмына иғтибарлыраҡ булһын, тип кәңәш итә ғалимдар.

■ Кеше һәр ваҡыт оҙаҡ йәшәргә, сәләмәт булырға хыяллана. Аҙ хәрәкәтләнеү, эмоциональ көсөргәнеш кеше организмының әүҙемлеген түбәнәйтә һәм йөрәк һәм ҡан тамырҙары, яман шеш, ревматизм, матдәләр алышыныуы менән бәйле сирҙәр барлыҡҡа килә. Былар барыһы ла организмдың иртә ҡартайыуына килтерә. Күп ғалимдар кешенең сәләмәтлегенә физик күнекмәләрҙең файҙалы булыуын билдәләй. Физик әүҙемлек метаболизм процестарын көйләп кенә ҡалмай, йөрәк ауырыуҙарын да иҫкәртә. Бынан тыш, әүҙем тормош алып барған кешенең кәйефе лә күтәренке була, ул стрестарға ла бирешмәй. Ғалимдар бигерәк тә йәйәү йөрөргә кәңәш итә. Йәйләп ҡына атлап йөрөһән, йөрәк ауыртмай, тиҙәр улар. Йәйәү йөрөргә яратҡан кеше артыҡ ауырлыҡ менән дә яфаланмаҫ, уның үҙәк нервы системаһы ла ныҡ булыр. Тәүҙә 350-500 метрҙы йәйәү үтеп ҡарағыҙ, аҙаҡтан иһә тиҙлекте лә, араүыкты ла арттырырға мөмкин. Йәй көнө ысыҡ төшкән үләндә ялан аяҡ йөрөү файҙалы, ул организмды нығыта.

ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ

# ЯРҘАМ САРАЛАРЫ ЭШЛӘЙ



**Рәсәйҙең оборона министры Андрей Белоусов ҡушыуы буйынса, ил төбәктәренең Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаилә ағзаларына ярҙам сараларының әһәмиәтен баһалау өсөн һанлы сервистар һәм күп функциялы үҙәктәр аша рейтинг төҙөләргә тейеш. Ул ярҙам сараларын һанлы форматҡа күсереүҙе тиҙләтәсәк һәм сифатын яҡшыртасаҡ.**

Документтар йыйырға һәм ғариза бирергә кәрәкмәгәс, мәҫәлән, МХО-ла ҡатнашыу тураһында белешмә алыу өсөн бер нисә секунд та етә. Оборона министрлығы мәғлүмәттәренә ярашлы, система тоторокло эшләй: май айынан алып 600 меңдән ашыу белешмә бирелгән. Күп функциялы үҙәктәрҙә "комплекслы хеҙмәтләндереү" механизмы ла индерелгән. Ул төбәк һәм федераль ярҙам сараларының тотош туплланмаһын бер юлы сығарып бирә ала.

"Башҡортостанда бөгөн Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаиләләренә 50-нән ашыу төр ярҙам ҡаралған. Улар белем биреү, медицина ярҙамы, социаль яҡлау, ташламалар алыу, көнкүреш мәсьәләләрен хәл итеү кеүек тормоштоң төрлө өлкәләренә ҡағыла", - тип белдерҙе ведомство-ара кәңәшмә йомғаҡтары буйынса Башҡортостандың вице-премьеры - спорт министры Руслан Хәбибов. *Мәҫәлән:*

● Башҡортостандан Махсус операция хәрбиҙәренә һәм уларҙың ғаиләләренә бушлай 278 ер участкаһы бирелгән, тағы ла 30 ғариза ҡарауға тапшырылған. Был хаҡта республиканың вице-премьеры - ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры Наталья Полянская журналистар менән әңгәмәһендә хәбәр итте. Ярҙам сараһынан файҙаланыу өсөн йәшәү урыны буйынса хакимиәткә йәки Ер министрлығының территориаль идаралығына мөрәжәғәт итергә кәрәк. Шулай уҡ уны Дәүләт хеҙмәттәре аша онлайн алыу мөмкинлеге лә бар. "Быңдай хоҡуҡҡа, Федераль ҡануниәткә ярашлы, Рәсәй Геройҙары, Рәсәй Федерацияһы ордендары менән бүләкләнгән МХО-ла ҡатнашыусылар, ә улар һәләк булған осраҡта - уларҙың ғаилә ағзалары эйә", - тип аныҡлыҡ индерә мәсьәләгә Наталья Полянская.

● Республикала МХО-ла ҡатнашыусылар өсөн транспорт һалымына льготалар оҙайтылды. МХО-ла ҡатнашыусылар 2026 йылда түләнергә тейешле 2025 йыл өсөн транспорт һалымын түләүҙән азат ителә. Депутаттар тейешле закон проектын Дәүләт Йыйылышының 27-се ултырышында ҡараны.

Закон хәрби хеҙмәткәрҙәрҙе һәм уларҙың ғаиләләрен мотоциклдарға, мотороллерҙарға, еңел һәм йөк автомобилдәренә, шулай уҡ башҡа үҙйөрөшлө транспорт төрҙәренә һалым түләүҙән азат итә. "Башинформ" яҙғанса, быңдай хоҡуҡ менән Донецк Халыҡ Республикаһы, Луганск Халыҡ Республикаһы, Херсон һәм Запорожье өлкәләре, Украина биләмәләрендә үткәрелгән Махсус хәрби операция ветерандары һәм ҡатнашыусылары, йәки уларҙың ғаилә ағзалары - ире (ҡатыны), ә никахта тормаған граждандар өсөн атаһы йәки әсәһе файҙалана ала. Льгота 2022 йылда раҫланды һәм 2024 йылға тиклем ғәмәлдә булды. Бөгөнгө ҡарар менән депутаттар уның ғәмәлдә булыу ваҡытын тағы бер йылға оҙайтты.

● Пенсияны иҫәпләгәндә ирекле формированиеларҙа хеҙмәт итеү иҫәпкә алына. Был башланғыс Рәсәй Президенты ҡушыуы буйынса әҙерләнгән һәм Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙы социаль яҡлауға йүнәлтелгән. Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав Володин парламенттың профилле комитетына ирекле формированиеларҙа хеҙмәт итеү ваҡытын эш стажы өсөн пенсия түләүҙәре иҫәбенә индереүҙе күҙ уңында тотҡан закон проектын ҡарауға ебәрҙе. "Рәсәйҙе яҡлаусылар тиң социаль гарантияларға (шул иҫәптән пенсия тәьминәте йәһәтенән) эйә булырға тейеш. МХО-ла ҡатнашыусыларҙың ирекле формированиеларҙа хеҙмәт итеү ваҡытын эш стажына индереү ғәҙел", - тип парламент спикерының һүҙҙәрен килтерәләр Дәүләт Думаһының рәсми сайтында. Закон проекты хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең махсус шарттарҙа үткәргән ваҡытын льготалы иҫәпләүҙе күҙ уңында тота. Башланғысты әлеге парламент сессияһы тамамланғансы ҡарау планлаштырыла.

● Ябай халыҡ та Махсус хәрби операциялағыларға әүҙем ярҙам итә. Мәҫәлән, Благовар районының Һарайлы ауылында йәшәүсе Хәтимә Мәүлитова яугирҙарға үҙ автомобилен тапшырған. Хәтимә Мәүлитова әйтеүенсә, ул 30 йылдан ашыу колхозда механизатор булып эшләй, ә хаҡлы ялға сыҡҡандан һуң үҙенең балаларына, яҡындарына ярҙам итә. "Пенсияға сыҡтым, хәҙер өйҙә ултырам. Ә техника беҙҙең яугирҙарға кәрәк буласаҡ. Ике кейәүем Тыуған ил һағына баҫты. Уларҙың береһе башҡорт батальоны составында водитель булып хеҙмәт итте. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, батырҙарса һәләк булды. Икенсе кейәүебеҙ бөгөн алғы һыҙыҡта, шуға күрә бөтә ғаиләбеҙ менән геройҙарыбыҙға ярҙам итергә тырышабыҙ. Ике ҡыҙым да машиналарын МХО зонаһына оҙатты", - ти Хәтимә Мәүлитова.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ИЗГЕ ЭШТӘРЕҢ...

## тау тишегенән дә ҡотҡарыр

**Бер ваҡыт өс йәш ир-егет сәфәргә сыға. Юлда көслө ямғыр башлана. Егеттәр яҡын-тирәләге тау мәмерйәһенә йәшенергә була. Ямғырҙан ҡотолдоҡ ҡына тигәндә, ҡапыл ҡая башынан таш төшөп, мәмерйә ауыҙын ҡаплай.**

Егеттәр ҡаушап ҡала, ләкин имандары уларға тыныслыҡ һаҡларға ярҙам итә. Береүһе: "Дөрөҫлөк һәм ихласлыҡтан башҡа беҙҙе бер нимә лә ҡотҡара алмай. Шуға, әйҙәгеҙ, Хоҙайҙан ярҙам итеүен һорайыҡ. Сөнки беҙ һәр ваҡыт намыҫлы булдыҡ. Ауыр хәлдә лә иман нурын һүндермәнек. Аллаһ Тәғәләгә мөрәжәғәт итеп, унан изге эштәребеҙ өсөн беҙҙе кисереүен үтенәйек", - тип тәҡдим итә.

Һәм ир-егеттәрҙең береһе доға уҡып, шулай ти: "Эй, Хоҙайым. Минең атам-әсәм инде ҡартайған. Аш мәлендә улар ризыҡланып бөтмәйенсә, балаларыма һәм ҡатыныма өҫтәл артына ултырырға рөхсәт итмәйем. Бер саҡ мин алыҫ урманда мал көттөм. Өйгә һуң ғына ҡайтып ингәндә, атай-әсәйемдең йоҡларға ятҡанын күрҙем. Улар йоҡонан уянмайынса, үҙем менән алып килгән ризыҡты өйҙәгеләргә тәҡдим итмәй торҙом. Эй, Хоҙайым. Әгәр ҙә минең был ҡылығым Һинең тарафтан хуплау тапҡан икән, беҙҙе ошо бәләнән ҡотҡарсы". Был һүҙҙәрҙән һуң таштың бер бәләкәй киҫәге ярылып төштә. Әммә мәмерйәнән сығыу мөмкинлеге булмай.

Икенсе егет Хоҙайҙан шулай тип үтенә: "О, Аллаһым. Мин туған кешемдең - бабайымдың ҡыҙына ғашиҡ булдым. Уны һөйөп, иң көслө мөхәббәт утында яндым. Уның менән бергә булырға теләнем, ләкин ул минең тәҡдимде ҡабул итмәне. Йылдарҙың береһендә уның уңманы. Ғаиләһен аслыҡтан ҡотҡарыр өсөн был ҡыҙ минә ярҙам һорап килде. Мин уға, әгәр ҙә минең менән булһаң, етерлек аҡса бирәм, тинем. Уның башҡа әмәле юҡ икәнен белә инем. Шул саҡ ул, Хоҙайҙан ҡурҡ, гонаһ ҡылыуҙан тыйыл, тине. Ғишыҡ тойғоларым көслө булһа ла, Аллаһ Тәғәләнән ҡурҡыуым көслөрәк булып сыҡты. Һәм ҡыҙға теймәйенсә, уға бөтә булған аҡсамды биреп сығарҙым. Эй, Хоҙайым! Әгәр ҙә был ҡылығымды ҡабул итһәң, беҙҙе бәләнән ҡотҡар". Таштың тағы бер киҫәге ярылып китә. Ләкин барлыҡҡа килгән ярыҡтан сығырлыҡ булмай әле.

Шунан өсөнсө егет доға уҡый башлай: "Эй, Хоҙайым! Мин үҙемә бер нисә хеҙмәткәр алдым һәм уларға эш хаҡы түләйенләнем. Бер аҙҙан бер хеҙмәткәрем минән китте, әммә тейешле эш хаҡын алманы. Уның аҡсаһын мин көсебемде үҫтереүҙә файҙаландым. Бер нисә йылдан һуң минә шул кеше осраны һәм эш хаҡын түләүҙе һораны. Шул саҡ мин уға: "Ошо дөйә, үгеҙ һәм һарыҡҡа күҙ һал. Уларҙы мин һинә тейешле булған аҡса менән һатып алдым. Шуның өсөн ул хайуандар хәҙер һинеке", - тинем. Ул бик аптыраны, мине шаярта, тип уйланы. Һүҙҙәремдең эскерһеҙ икәнен белгәс, мөлкәтен алып, үҙ юлында булды. Эй, Хоҙайым, әгәр был ҡылығымды изге тип һанаһаң, ҡотҡар беҙҙе". Шул мәлдә күҙгә күренмәгән көс ташты ситкә этәрә. Егеттәр Хоҙайға рәхмәт әйтеп, мәмерйәнән сыға һәм юлдарын дауам итә.

Бәйғәмбәребеҙ сәхәбәләргә был фәһемле тарихты йыш һөйләй торған булған. Йәнебеҙ хазинаһында Хоҙай хуплаған эштәр күберәк булырға тейеш. Изге эштәребеҙҙе телгә алып, беҙ доға ҡыла аласаҡбыҙ. Изге эштәребеҙ өсөн Аллаһ Тәғәлә беҙҙе бәлә-ҡазаларҙан һаҡлап торор.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# ТЕТРӘНЕҮҘӘР БУЛМАҺА...

## тиҙерәк үлер инекме?

**Был донъяла тик һин тигәнсә генә булмай. Һәр яңы көн ниндәйҙер үҙгәрештәр алып килә, электән хәл ителмәгән проблемаларға яңылары өҫтәлә тора. Һәр кемдең тормошонда була торған киҫкен хәлдәр, юғалтыуҙар, башҡа ауырлыҡтар кеше психикаһында көсөргәнешлек барлыҡҡа килтереп, тәрән һәм оҙайлы кисерештәр тыуҙыра. Фәндә әҙәм балаһының ошо халәтен стресс тип атайҙар.**



### Зыянлымы, әллә файҙалымы?

Глобаль стресс сәбәптәре итеп экология торошоноң аяуһыҙ насарайыуын, ҙур ҡалаларҙа йәшәүселәрҙең саманан тыш көсөргәнешле мөхиттә көн итеүен, эш һөҙөмтәләре өсөн яуаплылыҡтың ҙур булып, етәкселек яғынан кәмһетелеү йәиһә тирә-яҡтағыларҙың көнсөл һәм уҫал ҡараштарын тойоп йәшәү рәүешен һәм башҡа ошондай ауыр йоғонто яһаусы хәл-күренештәрҙе күрһәтеп үтергә була.

Стрестың кешегә зарарлы тәьҫире тураһында күп һөйләйҙәр, уның тән һәм нервы сирҙәренә сәбәп булыуы тураһында ишетмәгәндәр һирәктер. Туҡтауһыҙ стресс кисергән кешенең йә үтә агрессив, йә депрессияға бирелеүсән булып китеүе мөмкин. Стрестан тиҙ генә сыға алмай яфаланғандар йонсоу һәм тиҙ арыусан була. Һуңғы йылдарҙа табиптар байтаҡ ҡына кешенең "хроник йонсоу синдромы" тип аталған сиргә дусар булыуы тураһында ла яҙып сыҡты.

Әммә стресс бер үк ваҡытта кеше өсөн файҙалы ла: әгәр организмды йәшәйештә осраған ҡаршылыҡтарҙы үтеп сығыр өсөн кәрәк булған көсөргәнеш кисереүгә көйләй алмаһаҡ, беҙ бик күп маҡсаттарыбыҙға бер ҡасан да өлгәшә алмаҫ инек. Стресс арҡаһында кеше тиҙ үҙгәреп тороусы мөхиткә яраҡлаша ала, был - кеше организмына тәбиғәттән һалынған көйләү механизмы. Стрестар организмды сыныҡтырмаһа, беҙ күптән үлеп бөткән булыр инек. Стресс механизмдарын ғилми яҡтан өйрәнеүгә күп көс сарыф иткән Канада табибы Ганс Сельеның фекерҙәре фәһемле. Беҙ стрестан ҡасып ҡотола алмайбыҙ, әммә уны файҙалана алабыҙ, тигән ул. Бының өсөн уның асылын, тәбиғи тәғәйенләнешен һәйбәт белеп, үҙендең стресс менән килешеп йәшәү фәлсәфәһен булдырырға кәрәк икән.

"Стрестың төрлөһө була, - тип аңлата Корсаков исемендәге клиниканың психология һәм психиатрия кафедраһы профессоры Нина Тювина. - Киҫкен стресс тип аталғаны үтә тәьҫирле эмоциональ ситуация, мәҫәлән, яҡын кешендең үлеме, ҡурҡыныс тәбиғәт стихияһы, яман уйлы әҙәмдәрҙең ҡурҡытыуы кеүек хәл-ваҡиғалар һөҙөмтәһендә кисерелә. Хроник стресс - бик оҙаҡ дауам иткән негатив ситуация һөҙөмтәһе: эштә килеп тыуған проблемалар, шәхси тормоштағы ауырлыҡтар, даими рәүештә үҙ-үҙең менән ҡәнәғәтһеҙләнеү тойғоһо кисереү һ.б." Киҫкен стресс ваҡытында үҙенсәлекле психофизиологик реакция барлыҡҡа килә, ул беҙҙең эске көс-ҡеүәтебеҙҙе туплап, организмды яңы ситуацияға яраҡлаштырыуға йүнәлтелгән. Хроник стресс ваҡытында кризислы хәл-ваҡиғалар булмаһа ла, кире тәьҫир итеүсе кисерештәрҙең оҙайлы ваҡытта ҡабатланып тороуы психик көсөргәнеште арттыра бара.

### Стресс сәбәбе - үҙебеҙҙә

Һәр кеше айырым шәхес кенә түгел, бер үк ваҡытта йәмғиәт ағзаһы ла. Уның үҙ ихтыяждарын мөмкин тиклем яҡшыраҡ ҡәнәғәтләндереп, бәхетле тормошта йәшәгеһе килә. Әммә кеше бөтә ғүмере буйына йәмғиәт талап иткәнде лә мотлаҡ үтәргә бурыслы. Мәҫәлән, ул билдәле бер һөнәр эйәһе булараҡ, үҙ эшен юғары кимәлдә башҡарып, профессиональ яҡтан үҫеүен туҡтатырға тейеш түгел. Күптәр бер өйрәнгәненә күнегеп китеп, элеккесә эшләүен дауам итә, үҙгәрештәрҙе үҙһенмәй, үҙен үҙгәртергә лә ашҡынып тормай. Кешенең шәхси ихтыяждары башҡалар талап иткән менән тура килмәҫкә лә мөмкин: ул үҙ-үҙе менән ҡәнәғәт бит, унан тағы нимә таптырып йөҙәтәләр һуң? Шәхси баһа менән башҡа кешеләрҙең баһаһы араһында ла йыш ҡына ҙур айырма барлыҡҡа килә. Былар кеше психикаһында сағылыш тапмай ҡалмай: кире пландағы билдәле бер кисерештәр, үҙ тормошондан, эшендән ҡәнәғәт булмау кеүек сифаттар систематик рәүештә стресҡа нигеҙ һала.

Бында кешенең эшендәге һәм шәхси тормошондағы яуаплылығының арттандан-арта барыуы ла эҙһеҙ үтмәй. Беҙҙе бала саҡтан үҙ бәхетең үҙ ҡулыңда, тип, өйрәтәләр. Шуға ла һәр кем ҙурыраҡ уңыш-ҡаҙаныштарға өлгәшеп, баһалы һәм абруйлы шәхес булырға хыяллана. Ғаилә мөхитендә лә шул уҡ ихтыяждар, шул уҡ юғары талаптар: өйгә мулыраҡ табыш менән ҡайтыусы яҡшы ир, хәстәрлекле һәм наҙлы ҡатын, барыһын да ҡайғыртып торған ата-әсә, һәр саҡта ла изгелекле һәм ярҙамсыл туған булып ҡалырға кәрәк бит.

Ә кеше тормошо һәр саҡта ла бер тигеҙ һәм талғын ғына аҡҡан йылғала йөҙөп барыусы кәмә түгел шул, уның бер заман ҡомға терәлеүе лә бар. Ә беҙ һаман да, үҫмер ваҡытыбыҙҙағы кеүек, нимәлер өмөт итәбеҙ, хатта ниндәйҙер мөғжизә көтәбеҙ. Ә һин бәхет тип иҫәпләгәнең урап уҙһа? Өмөттәре селпәрәмә килгәндәрҙең, үҙҙәре көткән баһаларға өлгәшә алмағандарҙың, тора-бара бик ауыр тойғоларға бирелеп, булмаған ғәйепте кешенән булмаһа, үҙенән эҙләй башлауы ла бик мөмкин. Кешелектең суицид тигән шәхси сәбәпле, әммә асылы менән йәмғиәти булған ҡурҡыныс сире лә ошонан баш алмаймы икән?

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Деүет, юл турғайы

**(Полевой конек)**



Юл турғайының Башҡортостан территорияһында йәшәй башлауы XX быуатҡа тура киләлер. Был төрҙөң ареалы Урал алдының көньяҡ-көнсығышы һәм көньяғы, шулай уҡ Урал аръяғының көньяҡ райондарын алып тора. Был турала ғалимдар Ильичев менән Фомин яҙып ҡалдырған.

Ҙурлығы йәһәтенән урман деүетенә оҡшаған. Башҡа төрҙәрҙән төҫө - балауыҙ һары булыуы менән айырыла. Уның кәүҙәһендә таптар ҙа юҡ, булһа ла түшендә ген. Төрҙөң үҙенә генә хас ҡылығы ла бар, тирә-яҡҡа ҡарағанда бар кәүҙәһе менән вертикаль рәүештә өҫкә һуҙыла.

Ерҙә, ҡыуаҡлыҡта ултырып йырлай, йыры ҡыҫҡа ғына сутылдауҙан ғибәрәт: ҡабаланмай ғына "цыти, цыти" йәки "цирлю, цирлю" тип ҡабатлай. Ҡыҫҡа итеп "тви" йәки "циррюй" тип ҡысҡыра. Йылы яҡҡа осоп киткәндә йә ҡайтҡанда ла юл турғайы ошолай ҡысҡыра, үҙ-ара хәбәрләшә.

Апрель аҙағы - май башында осоп килә. Баҫыу, ялан, урман аҡландары, далалар, тауҙарҙың яланғас өлөштәрендә оя ҡора. Ояны инә ҡош ҡора, бының өсөн үлән, ҡыуаҡ, таш ҡаплап торған ерҙә уңайлы ғына соҡор таба һәм унда үлән, тамырҙар, ҡайһы саҡта йөн ҡушып үрелгән оя барлыҡҡа килә. 5-6, йышыраҡ 4-5 йомортҡа һала. Аҙаҡҡы йомортҡаһын һалғандан һуң инә ҡош баҫырға ултыра. 13-14 көндән бәпкәләр күренә башлай, улар 12-14 көн ояла ултыра һәм яйлап осорға өйрәнә.

Өлкәнәйә башлаған бәпкәләр дала буйлап күсенеп йөрөп, яңғыҙ ҙа, төркөмгә тупланып та йәшәй. Августа йылы яҡҡа оса башлайҙар, был мәл сентябрь уртаһына тиклем һуҙыла. Юл турғайының йылы яҡҡа осоп килеүе беҙҙең өсөн һиҙелмәй ҙә ҡала, сөнки улар республика далаларынан йырағыраҡ, көньяҡҡараҡ китеп туплана. Ҡышлау урындары - Үҙәк Африка һәм Көньяҡ Азия.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!



# ЯНҒЫН СЫҒЫП ТОРА

**Эйе, көн һайын теге йәки бында янғын сығыуы тураһында хъәбәрҙәр килә. Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы ла иҫкәртеүҙән туҡтамай: һүндерелмәгән тәмәке ҡалдырмағыҙ; электр приборҙары даими күҙәтеү аҫтында булһын, электр селтәренең артыҡ көсөргәнеше янғынға килтереүе ихтимал икәнде онотмағыҙ; янғынды иҫкәртеүсе прибор алып ҡуйығыҙ, янғын сыға ҡалһа, ул ваҡытында тауыш бирер.**

Башҡортостан буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы мәғлүмәте буйынса, уҙған аҙнала республикала ***79 янғын сыҡҡан***, уларҙа 3 кеше һәләк булған. Ҡотҡарыусылар республика халҡын янғын хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен инҡар итмәҫкә саҡыра.

● ***Бүздәк районының Арыҫлан ауылында*** янғын һүндергәндә һәләк булған 60 йәшлек ирҙең кәүҙәһе табылған. Ут кискә табан ағас йортта сыға. Ҡариҙел районының Татар Үреше ауылында сыҡҡан янғын да фажиғәгә алып килә. Үҙәк урамындағы ағас йортто ут ялмап ала. Ирекле янғын һүндереү командаһы һәм Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы янғын һүндереүселәре ваҡиға урынына тиҙ арала килеп етә. Ҡаза күргән өйҙә 61 йәшлек ирҙең һәләк булыуы асыҡлана. Ике осраҡ буйынса ла Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы тәфтишселәре янғын сәбәптәрен тикшерә.

● ***Өфөнөң*** Ҡуласа урамындағы күп ҡатлы йорттоң 6-сы ҡатындағы фатирҙа янғын сыға. Йоҡо бүлмәһендәге йорт мөлкәтенә ут тоҡана. Янғын һүндереүселәр уны һүндерә һәм төтөн ҡаплаған бүлмәнән ирҙе сығара. Зыян күреүсе табиптарға тапшырыла. Әммә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, табиптар ҡулында ул вафат була.

● БР буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, ***Ҡалтасы ауылында*** Еңеүҙең 50 йыллығы урамында янғын сыҡҡан. Янғын мунсала башлана, шунан һуң ут тиҙ арала уның менән бер ҡыйыҡ аҫтында урынлашҡан гаражға күсә. Ут "Шкода Октавиа" автомобиленә зыян килтерә. Янғын һүндерелә. Һөҙөмтәлә 39 йәшлек ҡатын тән йәрәхәттәре ала. Беренсе ярҙам күрһәткәндән һуң ул дауаханаға ятыуҙан баш тарта.

● ***Турбаҫлы ауылының*** Үҙәк урамында янғын сыға. Ут кирбес гаражды, "Дэу Нексия" еңел автомобилен ялмап ала һәм ике фатирлы йортҡа ут ҡабыу хәүефе тыуа. Янғын менән көрәшкә 3 автоцистерна һәм 12 янғын һүндереүсе йәлеп ителә. Ҡотҡарыусыларҙың оператив эш итеүе, шулай уҡ урындағы халыҡтың әүҙем ярҙамы арҡаһында уттың таралып китеүенә юл ҡуйылмай. Иң мөһиме - ғәҙәттән тыш хәл һөҙөмтәһендә бер кем дә зыян күрмәгән.

✓ *Башҡарған эштәре ябығыуға килтергән һөнәр эйәләре лә бар. Һорау алыуҙарҙа ҡатнашҡандарҙың 16 проценты зифа буйлы булыуҙарында һөнәрҙәре сәбәпсе тип иҫәпләй. Уларҙың күпселеге - завод эшселәре һәм ғалимдар.*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# ЙОМАҠ ӘЙТӘМ, ЙОМАҠ ӘЙТӘМ, УНЫ СИСКӘН СОС БУЛЫР...




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**45-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Атама. Ғүмәров. Дауахана. Семтем. Һәүер. Яйыҡ. Әй. Аяҙ. Инәү. Иртән. Бик. Ҡуян. Егет. Үксә. Дибров. Нур. Ралли. Тирә. Наян. Әсә. Олон. Аҙау.

**Вертикаль буйынса:** Һиҙиәтов. Дәүләтшин. Рейн. Үрт. Ғата. Ишемов. Хыял. Тамаша. Әрәмә. Ике. Сана. Арҡан. Ләлә. Алоха. Уҡа. Сәхәүетдинов. Ҡабан. Тема. Мырҙанов.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

***1447 һижри йыл.***

| Ноябрь (Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 8 (18) дүшәмбе | 7:38 | 9:26 | 13:30 | 15:03 | 16:50 | 18:38 |
| 9 (19) шишәмбе | 7:39 | 9:27 | 13:30 | 15:02 | 16:50 | 18:38 |
| 10 (20) шаршамбы | 7:40 | 9:28 | 13:30 | 15:02 | 16:50 | 18:38 |
| 11 (21) кесе йома | 7:41 | 9:29 | 13:30 | 15:02 | 16:49 | 18:37 |
| 12 (22) йома | 7:42 | 9:30 | 13:30 | 15:02 | 16:49 | 18:37 |
| 13 (23) шәмбе | 7:43 | 9:31 | 13:30 | 15:02 | 16:49 | 18:37 |
| 14 (24) йәкшәмбе | 7:44 | 9:32 | 13:30 | 15:03 | 16:49 | 18:37 |

*БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.*

*ҠЫҘЫҠ ТАҺА!*

# ҺИМЕҘ БУЛҒАНСЫ...

Ғалимдар ҡайһы бер һөнәрҙәрҙең һимереүгә булышлыҡ итеүен асыҡлаған. CareerBuilder JobSearch компанияһы белгестәре шундай һығымтаға килгән: директор ярҙамсыһы булып эшләүселәрҙең - 69 проценты, инженерҙарҙың - 56, уҡытыусыларҙың - 51, медсестраларҙың - 51, юристарҙың 48 проценты артыҡ ауырлыҡ менән яфалана.

Былдай төр анкета һорауҙарына 3,7 мең кеше яуап биргән. Әйткәндәй, уларҙы ялҡау тип тә әйтеп булмай: 50 проценты тренажер залына йөрөй, 30 проценты күнегеүҙәр менән өйҙә шөғөлләнә, ләкин шуларҙың яртыһынан күберәге - 55 проценты - артыҡ тән ауырлығына зарлана һәм яртыһына яҡыны (40 процент) һимеҙ булыуҙарында тап әлегесә һөнәрҙәрен ғәйепләй, сөнки көндәр буйына ултырып эшләү, стресс, дөрөҫ туҡланмау, корпоративтар һәм хеҙмәттәштәр менән киске мәжлестәргә йөрөү, ашап алырға ла ваҡыт етмәүе эҙһеҙ үтмәй.

Шул уҡ ваҡытта башҡарған эштәре ябығыуға килтергән һөнәр эйәләре лә бар. Һорау алыуҙарҙа ҡатнашҡандарҙың 16 проценты зифа буйлы булыуҙарында һөнәрҙәре сәбәпсе тип иҫәпләй. Уларҙың күпселеге - завод эшселәре һәм ғалимдар.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



## М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**6 декабрь "Һинһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадырова, А. Абушахманов), мелодрама. 16+

**9 декабрь "Ваня ағай"** (А. Чехов), тормош күренештәре. 16+

**11 декабрь "Яратам, тип әйтеп өлгөрмәнем"** (Г. Ғиззәтуллина, А.Абушахманов), кинодрама. 12+

## М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**5 декабрь "Яҙмышымдың икенсе бүлеге"** (Н.Саймон, А.Наҙырғолов), трагикомедия. 16+

**8 декабрь** Литературно-поэтическая программа по мотивам поэмы А. Твардовского "Василий Теркин", 11:00, 13:00, 15:00. 12+

**10 декабрь "Всё могло бы быть иначе..."** (И. Губач, М.Күлбаев), лирик комедия. 19:00. 16+

**11 декабрь "У ковчега в восемь"** (У. Хуб, М. Күлбаев), ғаилә спектакле. 11:00. 6+

**11 декабрь "Күктә ике йондоҙом балҡығанда"** (И. Аҫылбаева, И. Лоҡманов), музыкаль мелодрама. 19:00. 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**5 декабрь "Нимә ул Яңы йыл?"** (Д. Щербакова), музыкаль спектакль. 18:00. 0+

**6 декабрь "Нимә ул Яңы йыл?"** (Д. Щербакова), музыкаль спектакль. 11:00 һәм 13:00. 0+

**6 декабрь "История одной снежинки"** (В.Антошкин), музыкаль спектакль. 12:00 һәм 15:00. 0+

**7 декабрь "Нимә ул Яңы йыл?"** (Д. Щербакова), музыкаль спектакль. 11:00. 0+

**7 декабрь "Морозко"** (М.Шуринова).12:00 һәм 15:00. 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**5 һәм 6 декабрь "Музыка, рожденная ветром"** V Халыҡ-ара этник фестиваль сиктәрендә концерт. 6+

**9 декабрь "Тарихҡа ингән Геройҙар"** Ватан Геройҙары көнөнә ҡарата концерт программаһы. 6+

**10 декабрь "Мой милый край, святая Русь"** Георгий Свиридовтың тыуыуына 110 йылға ҡарата концерт. 12+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**5 декабрь "Ангелы рядом с нами"** (Г.Янышева), МХО тарихы. 12+

**6 декабрь "Дюмовочка"** (Г.Андерсен, Л. Ниғмәтуллина), әкиәт. 0+

**9 декабрь "Ҡоҙалар-ҡоҙасалар"** (Х.Латыпова, С. Латыпов), музыкаль комедия. 12+

**10 декабрь Рөстәм Ғиззәтуллиндың** концерты. 12+

**11 декабрь "Ынйыҡай менән Юлдыҡай"** (Ғ.Ғәбитов, Г. Саламатова), шиғри драма. 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**5 декабрь "Көҙҙәремә кереп барғанда"** БР атҡаҙанған артисы Ришат Хәмитовтың юбилей кисәһе. 12+

**7 декабрь "Дала буйлап икәү бара"** (Э. Йәһүҙин), музыкаль комедия. 12+

**11 ноябрь "Өлкән улым"** (А.Вампилов), притча. 16+

## А.Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**5 декабрь "Һинән - фатир, минән - ир!"** (Н.Ғәйетбай), комедия-гротеск. 16+

## Сибай концерт-театр берекмәһе

**9 декабрь Айгөл Һағынбаеваның** концерты. 6+

## БР Милли музейы

**5 декабрь "Легенда тыуғанда"** Ирина Окружнованың "Урал батыр" эпосы буйынса эштәре күргәҙмәһен асыу. 12:00. 0+

**6 декабрь "Көнсығыш - нескә төшөнсә"** географ Илиас Алкиндың тыуыуына 130 йыл айҡанлы лекция-экскурсия. 13:00. 12+

**9 декабрь "Еңеү двигателе"** "Ватан Геройҙары көнө" сиктәрендә батырлыҡ дәресе. 13:00. 12+

*МӘҘӘНИ МАЙҘАН*

# ЯҢЫ ЕТӘКСЕ ӘМИРОВ

**Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы, Башҡортостандың халыҡ артисы, Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры артисы, Шәйехзада Бабич исемендәге дәүләт йәштәр премияһы лауреаты Алмас Әмиров Башҡортостан Театр эшмәкәрҙәре союзының яңы рәйесе итеп тәғәйенләнде.**

Союздың отчет-һайлау съезында күпселек тауыш менән ошондай ҡарар ҡабул ителде. Алмас Хәҙис улы башҡа ижади союздар, министрлыҡ, хөкүмәт һәм киң мәғлүмәт саралары менән бәйләнеш булдырыу, республиканың театр тормошон үҫтереү, ҡыҙыҡлы проекттарҙы тормошҡа ашырыу һәм берлектәге эште ойоштороу төп маҡсат булыуын билдәләне. Яңы рәйес анығ бурысты ла атаны - Башҡортостандың Театр эшмәкәрҙәре союзы бинаһын (Актерҙар йортон) реконструкциялап, уны заманса мәҙәни башланғыстар үҙәгенә әйләндереү.

Алмас Әмиров рәйес вазифаһында Әхтәм Абушахмановты алмаштырҙы. 1999 йылдан етәкселек иткән Әхтәм Әхәт улы Халыҡтар дуҫлығы ордены менән бүләкләнде.

# МОҢ ЭЙӘҺЕ



**Хисмәт ҡайтты... Хисмәтулла Дәүләтов. Башҡортостандың атҡаҙанған артисы. Һыбай ҡайтманы ул, текә тимер атта ла, хатта ки даны менән дә ҡайтманы - тик үҙенә генә хас моңо менән ҡайтты. Үҙе яҙған йырҙары, ихласлығы менән ҡайтты.**

Тыуған ауылы Хәлилдә үткән, уның хәтеренә арналған район йыр конкурсында ҡатнашҡандар һәм тамаша ҡылғандар был мөғжизәне һис шикһеҙ тойғандыр. Шулай булмаһа, композитор хөрмәтенә уның йырҙарын башҡарыусылар бәйгеһе иҫ китмәле сара булып үтмәҫ ине. Ул бит үҙешмәкәр композитор ғына, тиер ҡай берәүҙәр. Булһын. Һеҙ берәй үҙешмәкәр шағирҙы беләһегеҙме? Хисмәтулла Дәүләтов та, һүҙҙәрен үҙе яҙмаһа ла, үҙ йырҙарының шағиры, ҙур актерлыҡ оҫталығы менән башҡарыусы автор-композитор ине.

Бар ижади ғүмерен Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театрына бағышлаған Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Хисмәтулла Дәүләтовтың был өлкәләге эшмәкәрлеге тураһында айырым һөйләргә кәрәк, әле һүҙ уның хәтерҙе мәңгеләштергән моңо хаҡында, сөнки иҫән сағында ул тик моңлолар араһында ғына популяр булды, исем-шәрифе алдына билдәле һүҙе йәбешмәне. Әммә үҙе йырҙары менән бихисап йыһыға популяр, билдәле булырға юл асты, сөнки йырҙары үҙенсәлекле ине, моңдан туҡылғайны. Ул ижад емештәре менән кәсеп итмәне, һатыулашманы, бушлай таратты. Хисмәтулла Дәүләтовтың был матур сифатын бәйгенең жюри ағзалары Башҡортостандың халыҡ артисы Альберт Салауатов, Башҡортостандың атҡаҙанған артистары Рөстәм Хәсәнов һәм Баязит Байназаровтар ҙа билдәләп үтте. Бөгөнгө көндә күптәрҙең һалма интеллектҡа таянып, йырҙар яҙыуына, былай бармай, яһалмалыҡҡа атланып ҡайтып булмай, моңға сорналып ҡына ҡайтып була, тип аңлатырға ҡайтты Хисмәт. Киләсәктә был бәйге республика кимәленә күтәрелеп, тыуған ауылына йыл да ҡайтһын, тип өмөт итәйек.

**Радик ӨМӨТҠУЖИН.**

# ҘУР ТЕАТР СӘХНӘҺЕНДӘ

**Быйыл X "Музыканы күрергә" Бөтә Рәсәй музыкаль театрҙар фестивалендә Башҡорт дәүләт академия опера һәм балет театры "Ете ҡыҙ" (12+) балетын тәҡдим итте.**

Спектаклде 26 ноябрҙә Ҙур театрҙың Яңы сәхнәһендә күрһәттеләр, тип хәбәр итә Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығының матбуғат хеҙмәте. "Ете ҡыҙ" балеты "Академик балет һәм музыкаль театрҙа заманса хореография" фестивале программаһының бер өлөшө булып тора.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, балеттың премьераһы 2024 йылдың октябрендә Башҡорт опера һәм балет театрында уҙҙы. Сюжеттың нигеҙендә - боронғо легенда, башҡорт фольклорының һиңыһы, Башҡортостандың иң сағыу һәм иҫтә ҡалырлыҡ образдарының береһе. Балеттың сағыу, хисле музыка авторы - Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың Композиторҙар союзы ағзаһы, халыҡ-ара һәм Бөтә Рәсәй конкурсы лауреаты Галина Зиганова. Сәхнәгә ҡуйыусыһы - балетмейстер, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Ринат Абушахманов.

Музыкаль театрҙар фестивале Мәскәүҙең бөтә музыкаль театрҙары майҙансыҡтарында ойошторола. Фестиваль афишаһында илебеҙҙең музыкаль театрҙары һәм БДБ илдәре театрҙары спектаклдәре бар. Форумдың инициаторы - Рәсәй Мәҙәниәт министрлығының финанс ярҙамы менән Музыкаль театрҙар ассоциацияһы. Проект Президенттың мәҙәни башланғыстар фонды булышлығында тормошҡа ашырыла.

# "БЕТЕҮ" ФИЛЬМЫ ЕҢДЕ



**Махсус хәрби операция темаһына төшөрөлгән башҡорт фильмы "Бетеү" халыҡ-ара кинофестивалдә еңеү яуланы. Ул "Иң яҡшы ҡыҫҡа метражлы фильм" дипломы менән бүләкләнде.**

- Етди дәғүәселәр араһында еңеү айырыуса ҡыуанысла. Конкурсҡа Рәсәйҙең төрлө ҡалаларынан һәм төбәктәренән, БДБ һәм БРИКС илдәренән 215 ғариза килде. Фестиваль тарихында тәүге тапҡыр Аргентина, Куба, Нигерия һәм Бразилиянан эштәр тәҡдим ителде, - тип һөйләне фильмдың режиссеры Руслан Юлтаев.

XI "Алтын башня" халыҡ-ара кинофестивале Ингушетия Республикаһының Мәҙәниәт һәм туризм министрлығы һәм Рәсәйҙең Кинематографистар союзы ярҙамында ойошторолдо. Кинофестивалде тантаналы ябыу сараһы Назрань ҡалаһында үтте.

*ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА*

# ИКЕ БЫУА ЯМҒЫР ЯУҘЫ

**Быуын сәскә.** Цикорийҙың башҡортса атамаһы ул быуын сәскә. *Быуын сәскә әрһеҙ үҫемлек. Быуын сәскәнең тамырын онтап, файҙалы эсемлек яһала.*

**Быуа.** Быуаның төп мәғәнәһе - быуып яһалған һыу һаҡлағыс. Был һүҙгә тағы ла "туктап ял алғанға тиклемге эш ваҡыты, һыуһын, тына" тигән йөкмәтке лә һалыныуы бар. *Бер быуа баҡса утау. Ике быуа ямғыр яуып үтте.*

**Бәҫләү. 1.** Бәҫләү, тимәк, хөрмәтләү. *Ата-әсәне бәҫләү. Бер-беребеҙҙе бәҫләйек.* **2.** Кейем-һалымды ҡәҙерләүгә бәйле лә "бәҫләү" тигән һүҙ килешә. *Әйберҙе бәҫләп тотоноу. Күлдәкте бәҫләп элеп ҡуй.*

**Бағана.** Бағана ла, төп мәғәнәһенән тыш, бүтәненә лә эйә. Әйтәйек, бағана шиғри әҫәрҙең рифма менән берләштерелгән бер нисә юллыҡ бер өлөшөн дә белдерә. Йәғни, куплет. *Йырҙың һәр бағанаһы бер төрлө башлана. Шиғыр бер нисә бағананан тора.*

**Бағланыш.** Ике арала булған ҡатнашлыҡ; бәйләнеш. *Ныҡлы бағланыш. Туғанлыҡ бағланышы бик көслө.*

**Шулай итеп, телебеҙҙе һаҡлауға, бәҫләүгә ҡағылышлы бағланышҡа тоғро ҡалайыҡ.**

**НУРБИКӘ** әҙерләне.

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БАТША ҒАЛИМ БУЛҺА...

## йорт уңыр

❧ Атаһыҙ етем - туйҙа етем, әсәһеҙ етем көн дә етем.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

❧ Һыйыр һөт биргәнсе, тауыҡ йомортҡа һалғансы, уларға үлем ҡурҡынысы янамай.

**(Свиш Гитри).**

❧ Сысҡанға икмәк валсыгы бир, ә ул һинән бер банка һөт һораясаҡ.

**(Генри Форд).**

❧ Мин тыуғанмын - бәхет өсөн шул ғына кәрәк.

**(Альберт Эйнштейн).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер хаким күрәҙәсегә килгән һәм уға:**

**-Дәүләтте нисек көслө итергә? - тигән һорау биргән.**

**- Аҡыл эйәләре-карттарҙың тәжрибәһенә, белеменә таянырға һәм... - тигән күрәҙәсе һәм һүҙен артабан дауам итмәксе булған, ләкин хаким уны артабан тыңлап тормаған, әйләнеп китеп барған.**

**Хаким үҙенең һарайына ҡайтҡас, бөтөн ил буйынса аҡыл эйәләрен саҡырырға бойорған. Улар йыйылып бөткәс, һәр береһен үҙ һарайында урынлаштырып, бер нимәгә лә мохтажлыҡ кисертмәйенсә йәшәткән. Тегеләре иһә хакимға аҡыллы кәңәштәр биргән, ул кәңәштәр ярҙамында ил көслө һәм бойондороҡһоҙ булып танылған.**

**Сирек быуат үткәс, хаким илдәге халыҡтың ҡырҡа кәмеүен, бары тик карттар ғына тороп ҡалып барыуын, балалар бөтөнләй һирәгәйеүен шәйләп ҡалған. Шунан ул баяғы күрәҙәсене эҙләп тапҡан һәм уға үпкәһен белдергән:**

**- Мин һинең кәңәшеңде тыңлап, эргәмә ҡарттарҙы йыйып, улар тәжрибәһенә һәм белеменә таянып идара иттем. Ләкин отолдом. Һин миңә дөрөҫ кәңәш бирмәнең...**

**- Юҡ, бында һинең ашығыусанлығың һәм алдан күрә белмәүсәнлегең ғәйепле, - тигән күрәҙәсе. - Теге ваҡыт һин минең кәңәшемдең тәүге яртыһын ғына тыңланың, икенсе яртыһын тыңларға түҙемлегең етмәне...**

**- Икенсе яртыһында ни тураһында әйтелә ине һуң? - тигән хаким.**

**- Боронғо аҡылда әйтелеүенсә, идара иткәндә аҡыл эйәләре-карттарҙың белеменә, тәжрибәһенә таян, ләкин бар аҡсаңды балаларға һал, - тигән күрәҙәсе. - Сөнки аҡыл - ул нигеҙ, ә балалар - улар диуар, ә һарай дөрөҫ һалынған нигеҙ һәм диуарҙары менән көслө. Дәүләтте бөтөн һәм көслө көйө һаҡлау өсөн нигеҙ һәм диуарҙарҙың ныҡлы ғына түгел, ә матур булыуы, уның архитектураһында аҡыл көсөнөң һәм бөйөклөктөң ярашыуы ла кәрәк. Ә һин бар көсөңдө нигеҙ ҡороуға ғына йүнәлттең дә, диуарҙар төҙөргә онноттоң..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт: Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99
График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты - 4.12.2025 й. 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 4.12.2025 й. 14 сәғәт 30 мин.
Баҫылып сыҡты - 5.12.2025 й.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2707
Заказ - 2253